Рәсәй Федерацияһы Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков Алмас Сәлим улы исемендәге Урал ауылы муниципаль бюджет белем биреү учреждениеһе урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| Ҡаралды | «Килешелде » | «Раҫлайым » |
| Мәктәп методик берекмәһе етәксеһе | директор урынбаҫары | Директор |
| Р.Р. Камалова | Д.Ә.Сайетхужина | Етимбаева А.Р. |
| Протокол № 1 | _________ | Приказ № 159 |
| «30» 08 2023 й. | «30» 08 2023 й. | «30» 08 2023 й. |

**1-се категориялы уҡытыусы**
**Дәүләтшина Мөнирә Сарим ҡыҙының**

**1-4 КЛАСТАРЫ ӨСӨН**
**«ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ», «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ»**
**УҠЫУ ПРЕДМЕТТАРЫ БУЙЫНСА**
**ЭШ ПРОГРАММАҺЫ**

2023-2024 уҡыу йылы

**Йөкмәткеһе**

1. Аңлатма яҙыу 3
2. “Туған (башҡорт) әҙәбиәте” предметы программаһын үҙләштереү буйынса билдәләнгән һөҙөмтәләр. 4
3. “Туған (башҡорт) әҙәбиәте ” предметының йөкмәткеһе 11
4. “Туған (башҡорт)теле” предметы программаһын үҙләштереү буйынса билдәләнгән һөҙөмтәләр. 19
5. “Туған (башҡорт)теле” предметын уҡытыу программаһының йөкмәткеһе 23
6. Уҡытыу-методик һәм мәғлүмәт-ресурс яҡтан тәьмин итеү 34

**АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ**

Уҡытыу рус телендә ойошторолған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында “Туған (башҡорт) теле”, “Туған (башҡорт) әҙәбиәте” уҡыу предметын өйрәтеү өсөн төҙөлгән өлгө программа Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартына (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2022 йылдың 31 майында раҫланған 286-сы һанлы ҡарары), Төп башланғыс дөйөм белем биреү программаһына (18.03.2022 йыл № 1/22), шулай уҡ “Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы”на (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының Коллегияһында 2019 йылдың 1 октябрендә раҫланған), “Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәрен һәм халыҡтарҙың туған телдәрен уҡытыу концепцияһы”на (Башҡортостан Республикаһы Башлығының 30.12.2020 йылдағы №УГ-613 указы) ярашлы төҙөлгән.

Программа үҙ эсенә аңлатма яҙыуҙы, уҡытыуҙың йөкмәткеһен, программа эстәлеген үҙләштереүҙе билдәләгән һөҙөмтәләрҙе һәм тематик планлаштырыуҙы ала.

Аңлатма яҙыуҙа предметты өйрәтеүҙә торған маҡсаттар һәм бурыстар, телде өйрәнеүгә башланғыс класс уҡыусыларының психологик яҡтан мөмкинлектәрен асыҡлаған характеристика бирелә. Предметтың уҡыу планындағы урыны күрһәтелә, йөкмәткенең эстәлегенә, билдәләнгән һөҙөмтәләрҙе аныҡлауға һәм тематик планлаштырыуға ҡарата аңлатма бирелә.

Предметтың йөкмәткеһендә башланғыс мәктәптә мотлаҡ уҡытылырға тейешле йүнәлештәр алынған.

Һәр класта йөкмәткене үҙләштереү һөҙөмтәһендә уҡыусыларҙың ниндәй универсаль уҡыу күнекмәләренә (танып-белеү - познавательные, аралаша белеү - коммуникативные, хатаны төҙәтә белеү, эште дөрөҫ йүнәлештә көйләү һәләте - регулятивные) эйә булырға тейешлеге бирелә.

Билдәләнгән һөҙөмтәләр үҙ эсенә башланғыс кластарҙа “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметын өйрәнеү аша шәхси, метапредмет һөҙөмтәләрҙе, шулай уҡ һәр класс аҙағында предметты өйрәнеүҙә ирешелгән уңыштарҙы ала.

Тематик планда программа йөкмәткеһе һәр бүлек буйынса бирелә, уҡыу эшмәкәрлегенә характеристика, йөкмәткене үҙләштереүҙә ҡулланылған алымдар, методик ысулдар, уҡытыуҙы ойоштороу төрҙәре күрһәтелә.

“Туған (башҡорт) теле” предметы “Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу” белем биреү өлкәһенә инә һәм уҡыу планының мотлаҡ уҡытыла торған өлөшөн тәшкил итә. Предметты өйрәтеү өсөн төҙөлгән был өлгө программа Башҡортостан Республикаһында һәм Рәсәй Федерацияһында дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәтеү өсөн тәҡдим ителә.

Уҡытыу рус телендә ойошторолған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында “Туған (башҡорт) теле” предметын өйрәтеү ойошманың мөмкинлегенә ҡарап һәм мәғариф тураһындағы хоҡуҡи акттарға ярашлы ата-әсәләрҙең ғаризаһына таянып ойошторола.

**Башланғыс дөйөм белем биреү кимәлендә “Туған (башҡорт) теле”, “Туған**

**(башҡорт) әҙәбиәте” предметтары программаһын үҙләштереү буйынса билдәләнгән һөҙөмтәләр:**

“Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында”ғы законда һәм Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартында ҡуйылған талаптар буйынса “Туған (башҡорт) теле”, “Туған (башҡорт) әҙәбиәте” предметтарын өйрәнеп, дүртенсе класты тамамлаған уҡыусылар түбәндәге һөҙөмтәләргә эйә булырға тейештәр:

**“Туған (башҡорт) әҙәбиәте”**

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

Шәхси һөҙөмтәләр мәктәптә ойошторолған укыу һәм тәрбиә процесына бәйле һәм уның сағылышы булып тора. Уҡытыу һәм тәрбиә эше тыуған ерҙең тарихына, мәҙәниәтенә, халыҡ йолаларына, традицияларына таянып үткәрелә һәм был эштә “Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметының әһәмиәте үтә лә ҙур.

Башҡорт теле дәресендә алынған аң-белем балаларға рухи аҙыҡ булып, уларға илен, халҡын, телен яратҡан шәхес булып үҫергә ярҙам итә. Уларҙа түбәндәге кешелек сифаттары тәрбиәләнә:

***Граждандлыҡ һәм илһөйәрлек сифаттарын тәрбиәләү:***

- бала үҙен Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең бер вәкиле итеп күҙаллай, уларҙың тарихына, мәҙәниәтенә битараф булмаған шәхес булып үҫергә тырыша;
- башҡорт телен әҙәби әҫәрҙәр аша халыҡтың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итә;
- башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән республиканың дәүләт теле һәм кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнә;
- тыуған яҡтың һәм илдең үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә битараф түгел, әҙәби әҫәрҙәр аша уларҙы өйрәнә, практик яҡтан традицияларҙы, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тергеҙергә һәм үҙләшерергә тырыша;
- башҡорт халҡына, шулай уҡ бергә аралашып йәшәгән башҡа милләт халыҡтарына хөрмәт менән ҡарай, телде, мәҙәниәтте шәхес булараҡ үҫештә этәргес көс итеп ҡабул итә;
- кешенең йәмғиәттәге яуаплылығын, хоҡуҡтарын аңлай, һәр бер кешегә хөрмәтле булыу, дөрөҫ йәшәү ҡанундарын белергә һәм һаҡларға кәрәклекте әҙәби әҫәрҙәр аша ҡабул итеү.

**Рухи һәм әхлаҡи тәрбиә:**

- һәр бер кешенең үҙенә генә хас булған сифаттары булыуын таный һәм әҙәби әҫәр геройҙары аша уларҙы сағыштырырға һәм баһа бирергә өйрәнә;
- башҡаларҙы хөрмәтләү, улар менән ыңғай мөнәсәбәттә булыу, ауыр ваҡыттарҙа ярҙам ҡулы һуҙыу һыҙаттары формалаша;
- кешеләрҙе физик һәм мораль яҡтан насарлыҡҡа этәргән холоҡ-фигел торошон ҡабул итмәй, шулай уҡ тыйылған телмәр сараларын ҡулланыуҙы хупламай;
- тиҫтерҙәре менән төрлө эшмәкәрлектә ҡатнаша, конфликт осраҡтары тыуҙырмай, бәхәс тыуғанда уны тауышһыҙ, ҡысҡырышһыҙ сисә белеү һәләтенә эйә була башлай, шулай уҡ әҙәби әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән бындай насар күренеште хәл итеү сараларын ҡулланырға тырыша.

**Эстетик тәрбиә:**

- мәҙәниәткә ҡарата хөрмәтле, халыҡ йолаларына, ижадына һәм сәнғәт төрҙәренә ыңғай ҡарашлы;
- үҙен күңеле яҡкан ижади эшмәкәрлектә һынап ҡарау теләге бар.

**Физик тәрбиә, һау булып үҫеү мәҙәниәтен формалаштырыу:**

- йәшәйештә һау һәм хәүефһеҙ йәшәү ҡағиҙәләрен үтәргә тырышыу (үҙе һәм башҡалар өсөн), шулай уҡ интернет селтәрендә өҫтәлмә мәғлүмәт эҙләү барышында;
- физик һәм психик һаулыҡҡа һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, аралашыу ҡағиҙәләрен үтәү һәм үҙ дәрәжәһен, уй-фекерен яҡлауҙа тейешле телмәр сараларын ҡуллана белеү.

**Хеҙмәт тәрбиәһе:**

- кеше тормошонда һәм йәмғиәттә хеҙмәттең ҡиммәтен аңлау, шулай уҡ әҙәби әҫәрҙә

һүрәтләнгән осраҡтар аша ҡабул итеү. Хеҙмәт һөҙөмтәләренә һаҡсыл һәм яуаплы булыу. Төрлө хеҙмәт эшмәкәрлегендә ҡатнашып, практик күнекмәләргә эйә булырға ынтылыу. Төрлө һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү, шулай уҡ улар тураһында әҙәби әҫәрҙәр аша танышыу.

**Экологик яҡтан тәрбиә:**

- тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл булыу, әҙәби әҫәрҙәр аша уны ҡурсылау, һаҡлау сифаттарын тәрбиәләү;
- тәбиғәткә зыян килтереүҙе ҡабул итмәү.

**Фәнни яҡтан донъяны танып-белеү ҡиммәттәре:**

- уратып алған донъя тураһында фәнни төшөнсәләрҙең формалашыуы, шулай уҡ әҙәбиәткә ҡағылышлы булған төшөнсәләрҙе үҙләштереү процесы аша ҡабул итә;
- әҙәби уҡыу аша аң-белемгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, әүҙемлек, үҙ аллылыҡ, отҡорлоҡ, яңылыҡҡа ынтылыш тәрбиәләү.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” предметының йөкмәткеһен үҙләштереү һөҙөмтәһендә уҡыусыларҙа түбәндәге **танып-белеү универсаль уҡыу күнекмәләре** формалашасаҡ:

*Төп логик күнекмәләр:*

- төрлө типтағы текстарҙы сағыштырыу, оҡшашлыҡтарын табыу;
- текстарҙы билдәле бер үҙенсәлеге буйынса төркөмләү;
- мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе, тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙе (фразеологизмдарҙы) төркөмләүгә уларҙың төп билдәһен асыҡлау;
- рус телендә алған белемдәрен башҡорт телен өйрәнгәндә ике телде сағыштырыу нигеҙендә ҡуллана белеү;
- уҡытыусы тәҡдим иткән алгоритмға таянып, текстарҙы төркөмләү өсөн улар араһындағы оҡшашлыҡты һәм айырманы билдәләү;
- уҡыу һәм практик күнегеүҙе башҡарыу өсөн етешмәгән мәғлүмәтте бирелгән алгоритм буйынса билдәләп, эҙләй белеү;
- текстҡа анализ яһағанда сәбәп-һығымта бәйләнештәрен билдәләй белеү.

*Төп эҙләнеү-тикшереү күнекмәләре:*

- уҡытыусы ярҙамында маҡсатты билдәләп, телмәр осрағына ярашлы үҙенең уй-фекерен үҙгәртеүҙе планлаштыра белеү;
- күнекмәне үтәү буйынса бирелгән бер нисә варианттан иң отошлоһон һайлай белергә өйрәтеү (бирелгән күрһәткестәр буйынса);
- бирелгән план буйынса мини- тикшереү, шулай уҡ проект эше башҡара алыу,
- төрлө аралашыу осраҡтарында ололар һәм тиҫтерҙәре менән тейешле этикет ҡағиҙәләрен һаҡлап, ыңғай мөнәсәбәттә эш итә белеү;
- тексты мәғәнә яғынан анализлағанда, уҡытыусы ярҙамында уның барышында һорауҙар бирергә, һығымта яһарға өйрәнә. Һығымталарҙы дәлилдәр менән нығыта белеү.
- күнегеүҙе үтәү өсөн етешмәгән мәғлүмәтте таба белеү.

*Мәғлүмәт менән эшләү:*

- практик күнекмәләрҙе үтәү маҡсатында мәғлүмәт табыуҙа һүҙлектәр, белешмә ҡулланмалар ҡулланыу; алгоритм буйынса тейешле мәғлүмәтте табып ҡуллана, уның дөрөҫлөгөн уҡытыусы өйрәтеүенсә тикшерә белеү;
- бирелгән алгоритм буйынса кәрәкле мәғлүмәтте тейешле сығанаҡтан таба белеү;
- интернеттан мәғлүмәт эҙләгәндә информация хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен ололар ярҙамында һаҡлап, улар менән кәңәшләшеп эш итергә күнегеү;
- телмәр берәмектәрен тикшереү йәки күҙәтеү һөҙөмтәләре буйынса лингвистик мәғлүмәтте үҙ-аллы схемалар, таблицалар аша еткерә белеү.

Башланғыс мәктәп аҙағында уҡыусыларҙа **коммуникатив универсаль уҡыу күнекмәләре** формалаша:

*Аралашыу:*

- таныш мөхиттә аралашыуҙың маҡсаты һәм шарттарына ярашлы әйтелгән уй-фекерҙе

ҡабул итеү һәм уға ҡаршы яуап биреү, үҙ хис-тойғоһон белдерә алыу;

- әңгәмәсегә хөрмәтле ҡараште булып, диалог ҡороу һәм бәхәсләшеү ҡағиҙәләрен үтәү;
- һәр кемдең төрлө яҡлы ҡараште фекерләү мөмкинлеген аңлау;
- үҙ уй-фекерен уйлап, дәлилдәр менән нығытып, әйтә белеү;
- бирелгән темаға диалог ҡора алыу, һорауҙарға ҡыҫҡа йәки тулыһынса асыҡлап яуап ҡайтара белеү. Диалогты башлап йәки дауам итеп алып китә алыу;
- һөйләшеү шарттарынан сығып, телдән һәм яҙма текстар (һүрәтләү, фекерләү, хикәйәләү) төҙөй алыу;
- парлашып һәм төркөмдә эшләнгән эш һөҙөмтәһе буйынса (күҙәтеүҙәргә һығымта, мини-тикшереү, проект эш башҡарыу) башҡалар алдында бәләкәй күләмле сығыш яһай алыу;
- сығыштың тексына күрһәтмә материал (һүрәт, фото, плакат, таблица) һайлап өҫтәй белеү.

**Берлектәге эшмәкәрлек:**

- оҙаҡ йәки ҡыҫҡа ваҡытта башҡарыла торған коллектив эштәрҙең маҡсаттарын һәм үтәлеү этаптарын билдәләй белеү (проект эше, мини-тикшереү һ.б.);
- төркөмдә бергәләп башҡарылған эште һәм уның һөҙөмтәһен һөйләшеп, килешеп, ролдәр буйынса бүлешеп башҡарырға әҙер булыу;
- төркөмдә бергә эшләгәндә төрлө ролдәрҙе башҡара алыу һәләтен үҫтереү (етәксе, башҡарыусы), үҙ-аллылыҡ, зирәклек, әүҙемлек күһәтеү;
- эште етәкләргә, ҡушылған эште үтәргә, башҡалар ҡарамағында эшләргә, килеп сыҡҡан бәхәсте сисергә әҙерлек күрһәтеү;
- эштең үҙ өлөшөн үтәүгә яуаплы ҡарау;
- дөйөм эшкә үҙе индергән өлөштө баһалай белеү;
- бирелгән өлгөләр буйынса бергәләп башҡарыла торған проект эшен үтәй алыу.

Башланғыс мәктәп аҙағында уҡыусыларҙа **эште көйләүсе универсаль уҡыу күнекмәләре** формалаша:

*Үҙ эшеңде ойоштороу:*

- уҡыу күнегеүҙәрен үтәү өсөн бирелгән эште башҡарыу планын һәм тәртибен билдәләү;

*Үҙ эшеңде тикшереү:*

- күнегеүҙәр үтәгәндә уңыштың йәки хатаның сәбәбен асыҡлау;
- уҡыу эшмәкәрлегенә бәйле ябай ғына һөйләмдәр менән үҙ фекерен әйтә һәм үҙенең дөрөҫлөгөн иҫбатлай алыу;
- тексты анализлау буйынса эшен үҙ аллы тикшереп, баһалай белеү һәләтенә эйә булыу;
- текстар менән эшләгәндә ебәрелгән хатаны табып, төҙәтә белеү;
- үҙе башҡарған эште класташтарының эше менән сағыштырып, бирелгән критерийҙар буйынса дөрөҫ итеп баһалай белергә өйрәнеү.

## Предмет һөҙөмтәләре

“Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметын дүрт йыл буйынса уҡытыу балала туған телгә ҡарата һөйөү, уны өйрәнеүгә теләк һәм ынтылыш тәрбиәләй. Бала үҙен Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең бер вәкиле итеп күҙаллай башлай, уларҙың тарихына, мәҙәниәтенә битараф булмаған шәхес булып үҫергә тырыша, башҡорт телен халыҡтың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итә.

Башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән республиканың дәүләт теле һәм кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнә. Бала башҡорт телендә уҡып, һөйләшеп, тирә-йүндә кешеләр менән аралашырға өйрәнеп, үҙендә оло ғорурлыҡ тойғолары һиҙә башлай.

Бала башҡорт телендә яҙылған әҫәрҙәрҙе уҡып:

- башҡорт телендә ижад ителгән әҫәрҙәрҙе һәм ауыҙ-тел ижадын өйрәнеп, телдең милли-мәҙәни ҡиммәт, тормошто танып-белеүҙең айырым бер төрө икәнлеген аңлай. Башҡорт әҙәбиәте донъя мәҙәниәтенең бер күренеше булараҡ әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һәм традицияларҙы һаҡлаусы һәм уларҙы быуындан-быуынға еткереүсе сара булып торғанына төшөнә;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнеү нигеҙендә башҡорт теленең үҙ ара аралашыуҙа уйнаған роле үтә лә ҙур икәнлекте аңлай;
- башҡорт телендә әҙәби әҫәрҙәр уҡыу баланы шәхси яҡтан үҫтерә; тирә-йүнде, милли мәҙәниәтте һәм тарихты тәрәнерәк өйрәнергә, үҙен башҡорт халҡының бер өлөшө итеп тойорға

мөмкинлек бирә;

- уҡылған әҫәрҙәр аша әхлаҡи ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡабул итергә, әҫәр геройҙары аша был нормаларҙың ысынбарлыҡтағы үтәлеше менән сағыштырыу мөмкинлеген бирә;

- башҡорт теленә генә хас булған һүрәтләү саралары (метафора, сағыштырыу, эпитет) менән таныша;

- уҡыу күнекмәләрен (ҡысҡырып уҡыу, эстән уҡыу), нәфис әҙәбиәт, фәнни- популяр, уҡыу-өйрәнеү текстарын үҙгәртеүҙе, тикшереүҙе нығыта, үҫтерә;

- әҫәрҙәрҙе уҡыу тәжрибәһен телмәр үҫтереүҙә әүҙем ҡулланыу (уҡылған һәм тыңланған тексты тикшереүҙә ҡатнашыу; текстҡа таянып, үҙ фекерен дәлилләй белеү; текст йөкмәткеһен тулыһынса, йәки ҡыҫҡаса һөйләп биреү; уҡылған текст буйынса телдән хикәйә төҙөү, шиғырҙы яттан һөйләү);

- үҙ аллы кәрәкле әҫәрҙе һайлай белеү, үҙен ҡыҙыҡһындырған әҫәрҙәр менән уҡыу өлкәһен байытыу;

- өҫтәлмә мәғлүмәт йыйыу өсөн белешмә сығанаҡтар ҡулланыу.

**Һәр класс буйынса предмет һөҙөмтәләре**

**Беренсе класс аҙағында:**

- уҡыу күнегеүҙәрен башҡарыу һәм көнкүрештә ҡулланыу өсөн уҡыуҙың кәрәклеген аңлау: һорауҙарға яуап биреү, әҙәби әҫәрҙәрҙә көнкүрештә йәмғиәт ҡағиҙәләрен һаҡлап йәшәй белеүҙе, башҡорт халҡының традицияларын сағылдырған күренештәрҙе табыу;

- ижекләп уҡыуҙан талғын рәүештә бөтөн һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡыу техникаһына күсеүҙе үҙләштереү; ҡысҡырып, уҡығанды аңлап, һүҙҙәрҙә тулыһынса хәрефтәрен төшөрөп ҡалдырмай, йә урындарын алыштырмай бәләкәй күләмле әҫәрҙе уҡыу. Уҡыу темпы – минутына 30 һүҙ (оценка – баһа ҡуйылмай).

- орфоэпия ҡағиҙәләрен һәм тыныш билдәләрҙе һаҡлап, Тыуған ил, ғаилә, балалар, тәбиғәт тураһында 2- нән дә кәм булмаған шиғырҙы яттан һөйләү;

- тексты һөйләмдәр йыйылмаһынан айыра белеү;

- шиғри һәм проза телмәрҙе айырыу;

- фольклорҙың һәм әҙәби әҫәрҙең жанрҙарын айырыу (йомаҡ, мәҡәл, һамаҡ, экиәт, хикәйә, шиғыр);

- уҡылған һәм тыңланған әҫәрҙең йөкмәткеһен аңлау һәм уның йөкмәткеһе буйынса бирелгән һорауҙарға яуап биреү;

- уҡылған һәм тыңланған әҫәргә ябай ғына анализ бирә белеү: әҫәрҙә ваҡиғаларҙың теҙелеп китеү тәртибен асыҡлау, геройҙарҙың эшенә, ҡыланышына (ыңғай һәм насар) характеристика биреү, таныш булмаған һүҙҙең мәғәнәһен һүҙлек аша билдәләү;

- уҡылған һәм тыңланған әҫәрҙе тикшереүҙә ҡатнашыу: әҫәрҙән алған хис-тойғолар тураһындағы һорауҙарға яуап биреү; әңгәмә барышында өйрәнелгән әҙәби төшөнсәләрҙе ҡуллана белеү (автор, герой, тема, идея, тестың исеме, әҫәрҙең йөкмәткеһе), яуаптарҙы текстан өҙөктәр табып иҫбатлау;

- терәк һүҙҙәргә, һорауҙарға, һүрәттәргә, бирелгән план ярҙамында әҫәрҙең йөкмәткеһен ваҡиғалар килеү барышын һаҡлап телдән һөйләп биреү;

- дөрөҫ әйтелеште, баҫымды һаҡлап, тексты ролдәргә бүлеп уҡыу;

- бирелгән алгоритм буйынса әҫәрҙең йөкмәткеһенә кәм тигәндә 3 һөйләмдән торған үҙ уй-фекерен әйтә белеү;

- әҫәрҙең исемен уның йөкмәткеһе менән сағыштырып, һығымта биреү;

- тауыш интонацияһы тураһында төшөнсәләре бар (пауза, ритм, терәк һүҙҙе айырыу һ.б.);

- шиғыр уҡығанда ритмды, темпты, тауыш көсөн дөрөҫ ҡулланыу;

- әҫәрҙә тауыш аша хис-тойғоларҙы билдәләй белә ( шатланыу, ҡыуаныу, күңелһеҙләнеү, ҡайғырыу, битарафлыҡ һ.б.);

- экиәтте, көлкөлө шиғырҙы, хикәйәне бер-береһенән айыра белеү;

- таныш булмаған һүҙҙе дәреслектәге һүҙлек ярҙамында аңлата белеү;

- уҡылған, йәки тыңланған әҫәр буйынса әңгәмәлә ҡатнашҡанда өйрәнелгән әҙәби төшөнсәләрҙе ҡуллана белеү (тема, әҫәрҙең төп идеяһы, әҫәрҙең исеме, йөкмәткеһе, халыҡ

әкиәте, автор әкиәте);

- башы бирелгән тексты дауам итеп телдән һәм яҙма рәүештә уйлап сығарыу (кәм тигәндә 3 һөйләмдән торған);

- китаптың йәки дәреслектең тышы, йөкмәткеһе, һүрәттәре буйынса уның эстәлеген билдәләй белеү;

- тәҡдим ителгән исемлек, йәки ололар кәңәше буйынса китап һайлай белеү, бирелгән алгоритм буйынса уҡылған китап тураһында һөйләү;

- өҫтәлмә мәғлүмәт алыу маҡсатында белешмә сығанаҡтарға мөрәжәғәт итә белеү.

***Икенсе класс аҙағында:***

- тирә-йүнде танып-белеү, үҙ-үҙеңде һәм милли мәҙәниәтте, тарихты яҡшыраҡ өйрәнеүҙә башҡортса әҫәрҙәрҙе уҡыу мөһимлеген аңлау;

- телмәр үҫешен үҙ аллы үҫтереүҙә китап уҡыуҙың мөһимлеген аңлау; уҡылған һәм тыңланған әҫәрҙәрҙе тикшереүҙә әүҙем ҡатнашыу;

- халыҡ һәм автор әкиәттәренең айырмаһын һәм оҡшашлығын билдәләү;

- дәреслектә бирелгән һүҙлекте һүҙҙең мәғәнәһе буйынса өҫтәлмә мәғлүмәт алыу өсөн ҡуллана белеү;

- әҫәр геройҙарын тышҡы ҡиәфәте, хәл-ҡылығы, телмәре, башҡаларға булған мөнәсәбәте буйынса баһалай белеү;

- йәнлектәргә мәрхәмәтле булыу, кешеләргә ҡарата ихтирамлы, хөрмәтле, ярҙамсыл була белеү кеүек хис-тойғоларҙы аңлай, ҡабул итә һәм үҙендә тәрбиәләргә тырыша;

- авторҙың геройға булған мөнәсәбәтен аңлай;

- шиғри әҫәрҙәрҙең үҙенсәлеген тойомлай, прозаик әҫәр менән сағыштырып, айырмаһын билдәләй;

- әҫәрҙә ысынбарлыҡты тылсымлы һүрәтләүҙән айыра белә;

- әкиәттең төҙөлөшөн билдәләй, иллюстрацияла әкиәттең ниндәй сюжеты һүрәтләнгән, таба, һөйләй белә;

- әкиәттә образдар һүрәтләү өсөн ҡулланылған алымдарҙы (ҡабатланыу, арттырыу, сағыштырыу) билдәләй ала;

- халыҡ әкиәттәренең төрөн (тылсымлы әкиәт, көнкүреш, йә хайуандар тураһында) билдәләй белә;

- шиғырҙа рифманы, ритмды күҙәтеп, билдәләй белә;

- дәреслектә бирелгән мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен аңлай, уларҙы уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһе менән сағыштырып, һығымта яһай;

- өйрәнелгән әҫәрҙәр буйынса викторина, кроссворд, башваткыстар төҙөй ала;

- өҫтәлмә мәғлүмәт алыу маҡсатында белешмә сығанаҡтарға мөрәжәғәт итә белеү;

- үҙе һайлап алып шиғырҙы яттан һөйләү;

- уҡылғандың йөкмәткеһендә тәрбиәүи осраҡтарға иғтибар итеп, уларға баһа бирә белеү (тәбиғәткә, кешеләргә, предметтарға ҡарата үҙ мөнәсәбәтен белдереп);

- текста осраған метафораларҙа, эпитеттарҙа һәм сағыштырыуҙарҙа милли үҙенсәлектәрҙе тойомлай, улар тураһында ябай ғына төшөнсәләрҙе үҙләштереү;

- башҡорт телендәге әҫәрҙәрҙе уҡыу барышында үҙенең уҡыу күнекмәләрен камиллаштыра: ҡысҡырып уҡыу, эстән уҡыу, әҙәби һәм өйрәтеүсе текстарҙы төрлөсә үҙгәртә белеп, эш төрҙәрен үҙләштерә белеү;

- уҡылған һәм тыңланған әҫәрҙе тикшереүҙә ҡатнашыу: әҫәрҙән алған хис-тойғолар тураһындағы һорауҙарға яуап биреү; әңгәмә барышында өйрәнелгән әҙәби төшөнсәләрҙе ҡуллана белеү (автор, герой, тема, идея, тестың исеме, әҫәрҙең йөкмәткеһе), яуаптарҙы текстағы өҙөктәр аша иҫбатлау;

- автор, төп герой, антоним, синоним, сағыштырыу тигән төшөнсәләрҙе аңлы рәүештә ҡулланыу;

- бер үк теманы төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙә билдәләй белеү;

- уҡыу өлкәһен киңәйтеп, төрлөнән-төрлө яңы әҫәрҙәр уҡыу;

- әҫәрҙе уҡыуҙан йәки тыңлауҙан алынған хис-тойғолар тураһында һорауҙарға яуап биреү; был тәьҫораттарҙы башҡа сәнғәт төрҙәре аша ла алып булыуға төшөнә.

***Өсөнсө класс аҙағында:***

- башҡорт телендә әҫәрҙәрҙе өйрәнеү - башҡортса аралашырға, һөйләшергә, тирә яҡтың матурлығын асырға, күрергә, уның менән һоҡланырға өйрәнә башлай;

- тыуған әҙәбиәтте халыҡтың милли-мәҙәни ҡиммәте, тәрбиәүи ҡалыптарҙы һаҡлаусы һәм уны яңы быуынға тапшырыусы сара итеп ҡабул итә башлай;

- геройҙарҙың эш-хәрәкәтенә әхлаҡи яҡтан баһа бирергә һәм уны иҫбатларға өйрәнә;

- башҡорт әҙәбиәтен уҡыу аша уҡыу күнекмәләре камиллаша: ҡысҡырып һәм эстән уҡыу, әҫәрҙе тикшереү, уны ябай ғына алымдар менән үҙгәртә белеү;

- башҡортса әҫәрҙәр уҡыу баланың телмәрен үҫтерә, һөйләшеү тәжрибәһен арттыра. Бала шуға таянып, уҡылған, тыңланған тексты тикшереүҙә ҡатнаша ала; текстҡа таянып, үҙ фекерен әйтә һәм уны иҫбатлай белә; тексттың йөкмәткеһен тулыһынса, йәки ҡыҫҡаса һөйләп бирә ала; тексты герой исеменән тулыһынса һөйләп бирә;

- телдән терәк һүҙҙәргә, һүрәттәргә, һорауҙарға, план буйынса ваҡиғалар теҙмәһен һаҡлап, әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләп биреү;

- дөрөҫ әйтелеште, интонацияны һаҡлап, тексты ролдәргә бүлеп уҡыу;

- лирик һәм көлкөлө поэтик әҫәрҙәрҙе бер-береһенән айырыу;

- үҙенсәлектәре буйынса төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙе айыра белеү (әкиәт, тиҙәйткес, һанашмаҡ, йыр, йомаҡ, хикәйә, шиғыр);

- әҫәрҙең төҙөлөшөн билдәләү: башы, аҙағы, ваҡиғалар барышы. Уны абзацтарға бүлеү, планын төҙөү;

- аңлы рәүештә әҫәрҙең төп мәғәнәһен, геройҙың портретын, эш-хәрәкәттәрен, ҡылығын билдәләп, уларға баһа биреү;

- төп геройҙың эш-хәрәкәттәренә, ҡылығына үҙ мөнәсәбен белдереү;

- дәреслектә бирелгән әҫәрҙәрҙә ҡулланылған сағыштырыу, һүрәтләү, эпитет алымдарын билдәләү;

- рәссамдәр ижад иткән пейзаждарҙа лирик һүрәтләүҙе сағыштырырға өйрәнеү;

- әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡ, түҙемлек, хөрмәтләү, ярҙамсылыҡ, яратыу һәм хәстәрләү кеүек әхлаҡи һәм этик төшөнсәләрҙе билдәләй белеү;

- әҫәрҙең йөкмәткеһен һүрәтләүҙә иллюстратор-рәссамдың, аниматорҙың ( терминды атамайынса) уйнаған роленә төшөнөү;

- бирелгән план буйынса әҫәрҙә ваҡиғалар барышын тергеҙеү;

- әҙәби әҫәрҙе фәнни-популяр текстан үҙенсәлектәре буйынса айыра белеү;

- бирелгән темаға кескәй генә күләмле текст төҙөү, уны дөрөҫләп, төҙәтә белеү;

- уҡыусы көндәлегендә үҙ-аллы уҡылған әҫәрҙең авторын, исемен, темаһын, персонаждар тураһында мәғлүмәттәр яҙып, яҙма алып барыу;

- шәжәрә, ҡобайыр, эпитет, аннотация, төп геройҙың портреты тигән төшөнсәләрҙе үҙләштереү;

- уҡылған, йә тыңланған әҫәр буйынса әңгәмәлә ҡатнашып, текстҡа таянып, үҙ фекерен әйтә белеү;

- исеменә, һүрәттәренә, йәки өҙөгө буйынса әҫәрҙең йөкмәткеһен билдәләргә тырышыу;

- текст буйынса үҙ-аллы һорауҙар төҙөү;

-

- тексты аңлар һәм өҫтәлмә мәғлүмәт табыр өсөн белешмә сығанаҡтар менән ҡуллана белеү;

- “Минең ҡалам/Минең ауылым”, “Минең исемем нимә аңлата?” темалары буйынса ҡыҫҡа ваҡытлы проект эштәре башҡарыу;

- Башҡортостандың тау-йылғалары, күлдәре, ҡалалары атамалары буйынса ребустар, кроссвордтар, башваткыстар төҙөү;

- китапханала тематик картотеканы ҡуллана белеү;

- тылсымлы йөкмәткеле белдереүҙәр, телеграммалар төҙөү;

- көлкөлө шиғырҙар буйынса виртуаль видеояҙмалар эшләү (алдан үткәрелгән әҙерлек эш ярҙамында);

***Дүртенсе класс аҙағында:***

- башҡорт әҙәбиәтен уҡыуҙың үҙ аллы үҫеш өсөн мөһим булыуын аңлау;

- әҙәби әҫәр геройҙарының, авторҙың һүрәтләнгән ваҡиғаларға ҡарата булған уй-фекерен билдәләй алыу;

- башҡортса әҫәрҙәрҙе уҡыу аша баланың уҡыу күнекмәләре камиллаша: ҡысҡырып һәм эстән уҡыу, әҫәрҙе тикшереү, уны ябай ғына алымдар менән үҙгәртә белеү;

- баланың һөйләшеү тәжрибәһе арта: уның уҡылған, тыңланған тексты тикшереүҙә ҡатнаша алыуы;

- тексҡа таянып, үҙ фекерен әйтеү һәм уны иҫбатлай белеү;

- текстың йөкмәткеһен тулыһынса, йәки ҡыҫҡаса һөйләп бирә алыу;

- тексты герой исеменән тулыһынса һөйләп бирә белеү;

- уҡылған әҫәрҙәр нигеҙендә телдән ҡыҫҡа ғына күләмле текст төҙөү;

- үҙ аллы үҙе өсөн ҡыҙыҡлы булған әҫәрҙе һайлап, уҡыу даирәһен киңәйтеү;

- тексты аңлар һәм өҫтәлмә мәғлүмәт табыр өсөн белешмә сығанаҡтар менән ҡуллана белеү;

- хикәйәнең, повестың, шиғырҙың, йырҙың, көләмәстең, ҡобайырҙың, эпостың жанр айырмаһын билдәләй алыу;

- ике йәки бер нисә әҫәр өҙөгөн сағыштырып, уларҙа ҡаралған төп идеяны, автор ҡулланған образ тыуҙырыусы сараларҙы билдәләү;

- әҫәрҙәге персонаждың эш-хәрәкәтен, холоҡ-фиғел сағылышын үҙ-аллы тикшереп, ваҡиғалар барышын тергеҙә белеү;

- билдәләре буйынса әҙәби әҫәрҙе, фәнни-популяр, йәки өйрәтеүсе текстарҙы бер-береһенән айыра белеү;

- эпик әҫәр, йә уның ниндәйҙер бер өлөшө буйынса сәхнәләштереү өсөн күмәкләп сценарий төҙөү, йә презентация эшләү;

- поэтик һәм прозаик әҫәрҙәрҙе тасуири итеп яттан һөйләү;

- бирелгән тема буйынса тексҡа баһалама биреү;

- үҙе төҙөгән тексты дөрөҫләп төҙәтә белеү;

- пейзажды һүрәтләү тексындағы сараларҙы (эпитет, сағыштырыу, йәнләндереү) һынлы сәнғәттә ҡулланылған алымдар менән (композиция, төҫтәр)сағыштырыу;

- халыҡ йырын автор йырынан айыра белеү;

- йыр тыңлағанда тыуған хис-тойғоларҙы билдәләү;

- эпос, әҫәрҙең төҙөлөшө, метафора төшөнсәләрен айыра белеү;

- көләмәс, ҡобайыр, эпос төшөнсәләрен бер-береһенән айыра белеү;

- китаптың йөкмәткеһе, каталог менән эшләй белеү, автор буйынса, тәкдим ителгән исемлек буйынса китап һайлау;

- йөкмәткеһе һәм һүрәттәре буйынса китаптың темаһын һәм йөкмәткеһен билдәләү;

- тексҡа план төҙөү, килеүе боҙолған өлөштәрен төҙәтеү, өҫтәү;

- бер теманы яҡтыртҡан, ләкин төрлө жанрҙа бирелгән әҫәрҙәрҙе сағыштырыу;

- тексты тикшереү: төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙә геройҙың портретын, пейзажды, ваҡиға урынын һүрәтләүҙе таба белеү;

- өҫтәлмә мәғлүмәт алыу маҡсатында белешмә материалдар ҡуллана белеү;

- уҡыу маҡсатына ярашлы тексты һөйләп биреү;

- балалар әҙәбиәте тематикаһын, үҙе ятаҡан яҙыусы һәм уның әҫәрҙәре тураһында һөйләй белеү;

- һүҙ (текст), һүрәт (иллюстрация), тауыш (музыкаль әҫәр) ярҙамында бирелгән мәғлүмәтте сағыштырыу;

- йәш китап уҡыусы ҡағиҙәләрен белеү һәм үтәү;

- әҫәрҙәрҙә тарихи дәүер менән бәйле һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы аңлы рәүештә ҡабул итә;

- Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда сығарылған тәүге китаптар тураһында төшөнсәләре бар;

- әҫәрҙәрҙе (йомаҡ, мәҡәл, экиәт, шиғыр, хикәйә) жанр буйынса айыра һәм төркөмләй белеү;

- тексты анализлау: темаһын билдәләү, әҫәрҙә ваҡиғаларҙың теҙелеп китеү тәртибен асыҡлау, геройға характеристика биреү, уның эшенә, ҡыланышына баһа биреү, йөкмәтке буйынса һорауҙар бирә белеү;

**“Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметының йөкмәткеһе**

“Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметының йөкмәткеһен билдәләгәндә түбәндәгеләргә иғтибар бирелә:

- башҡорт халҡының милли үҙ аңында мөһим урын алған, быуаттар буйына формалашҡан концепттар (төшөнсәләр) алына (яҡшылыҡ, дөрөҫлөк, намыҫ, тыуған ергә һөйөү һ.б.). Былтөшөнсәләрҙе уҡыусыларға аңлатыу балалар өсөн еңел, аңлайышлы,тиҙ отоп алырлыҡ булған әҫәрҙәр һайлана.

- башланғыс класс уҡыусыларының тиҫтерҙәре һүрәтләнгән әҫәрҙәр алыу. Был әҫәрҙәрҙең геройҙары уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлылар, эшләгән эштәре, уй-фекерҙәре, һөйләшеүҙәре уларға яҡын, күп нәмәлә оҡшашлыҡ бар, улар кеүек булырға тырышыу мөмкинлеге бар. Программаға ингән ҡайһы бер әҫәрҙәр бала саҡтың төрлө дәүерен сағылдыра.

- башҡорт халҡының йәшәйешен, тарихын, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен сағылдырған әҫәрҙәр һайланып, баланы илдең, Башҡортостандың мәҙәни, рухи һәм әхлаҡи донъяһы менән таныштыра, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ ептәрен нығыта, татыу һәм берҙәм йәшәргә өндәй.

“Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметының йөкмәткеһен өйрәнеү өс лексикбүлектән тора:

1. Мине уратып алған донъя.
2. Мин  һәм минең ғаиләм.
3. Минең тыуған ерем – Башҡортостан.

Һәр бүлектә тыңлау өсөн ауыҙ-тел ижадынан халыҡ әкиәттәре, авторҙар ижад иткән әкиәттәр, ҡыҫҡа күләмле ауыҙ-тел әҫәрҙәре (мәҡәлдәр, йомаҡтар, әйтемдәр, һ.б.) бирелә. Шулайуҡ балаларға бағышланған һәм балалар тураһындағы әҫәрҙәр урын алған. Туған яҡтың тәбиғәтенә һәм ата-әсәйҙәргә бағышланған әҫәрҙәр индерелде.

Балаларҙа китап менән эш итә белеүҙе, йәғни библиографик мәҙәниәтте формалаштырыу һәм үҫтереү ҡарала.

Программа тәкдим ителгән әҫәрҙәрҙе балаларҙың үҫешенә, әҫәрҙәрҙе аңлы рәүештә ҡабул итеүенә ҡарап һайлап алыу мөмкинлеген бирә, шулай уҡ йөкмәткенең вариатив өлөшөн төҙөгәндә башланғыс мәктәп урынлашҡан ерҙең милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған әҫәрҙәрҙе үҙҙәренең эш программаһына индереүҙе күҙаллай.

**1 класс**

Беренсе класта әҙәби уҡыу дәрестәренең үҙенсәлеге булып әҫәрҙе уҡытыусы уҡығанды тыңлау тора, сөнки уҡыусыларҙың күбеһе әле яҡшылап уҡый белмәй. Шуға тыңлау аша әҙәби әҫәрҙе ҡабул итә белеү һәләтен формалаштырыу һәм үҫтереү бурысы беренсе урында тора.

**Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлеге**

Уҡыу күнекмәләрен үҫтереү: һөйләмдәге һүҙҙәрҙе тулыһынса ҡушып, уҡыу тиҙлегенәкренләп үҫтереү. Эстән уҡыу, уҡығанды һөйләп биреү. Тауыш менән дөрөҫ идара итергәкүнегеү.

*Башҡорт халыҡ әкиәте һәм әҙәби әкиәт (автор әкиәте).* Әҙәби әҫәрҙең һәм ауыҙ-тел ижадының тексын сағыштырыу: айырмаһы һәм оҡшашлығы. Әкиәттә ысынбарлыҡ һәм мөғжизә. Ваҡиғаларҙың башҡарылыу тәртибе. Сюжеттың иллюстрацияларҙа сағылышы.

*Балаларға бағышланған һәм балалар тураһындағы әҫәрҙәр*. Әҫәрҙең “төп темаһы” тигән дөйөм төшөнсә индерелә: нимәгә бағышланған, нимә тураһында һөйләнелә. Әҫәрҙең төп мәғәнәһе: нимәгә өйрәтә, ниндәй сифаттар тәрбиәләй?

Тексты төрлө һөйләмдәр йыйылмаһынан айыра белеү.

*Тыуған яҡ тәбиғәте тураһындағы әҫәрҙәр.* Тәбиғәткә бағышланған шиғырҙарҙы үҙ аллы уҡыу һәм айышына төшөнөү, ҡабул итеү. Шиғырҙың хис-тойғоға булған

тәьҫирен иллюстрацияла сағылдырыу. Поэтик әҫәрҙе тасуири уҡыу: ритмды, темпты, тауыш көсөн бирә белеү.

*Ауыҙ-тел ижады* – фольклорҙың сәсмә төрө (йомаҡ, мәҡәл, һамаҡлау-һанашмаҡ). Уларҙың ҡулланылышы – кескәй балаларҙың күңелен асыу, уйнатыу, өйрәтеү, зиһенде, хәтерҙе үҫтереүсе сара булып тора.

*Әсәйҙәргә бағышланған әҫәрҙәр*. Үҙ аллы уҡыу һәм әсәйгә булған яратыу, һөйөү хистәрен күрһәтергә, еткерергә тырышыу.

Библиографик мәҙәниәтте тәрбиәләү. Китап – белем сығанағы икәнлекте төшөндөрөү.
Китап менән эшләй белеүҙе формалаштырыу: китаптың тышы, эстәлеге, һүрәттәр
Уҡыу өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәр:
бүлек. Мине уратып алған донъя.
Айһылыу Йәғәфәрова. Һанашмаҡ“Һыйырҙың быҙауы бар...” Мәрйәм Бикбова. Әүрәткес “Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян”
Муса Ғәли. Йомаҡ “Тамсы тамды...”
Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина. «Кем минең әсәйем?” (әкиәт)
бүлек. Мин һәм минең ғаиләм. Факиһа Туғыҙбаева. Шиғыр “8-се март” Гүзәл Ситдиҡова. Һанашмаҡ “Түңәрәк”
Фәүзиә Рәхимғолова. Көлкөлө шиғыр “Бутҡа бешерҙек”
бүлек. Тыуған ерем – Башҡортостан
Мәжит Ғафури. Шиғыр “Йәй”
Башҡорт халыҡ әкиәте “Төлкө менән бүре”
Башҡорт халыҡ ижады: һамаҡтар, йомаҡтар, мәҡәлдәр, һанашмаҡтар.
Ижади эшмәкәрлек
Бәләкәй күләмле сығыштар әҙерләү, текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуаптар биреү. Бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү. Әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һүрәттәр төшөрөү.
Әҫәрҙе сәхнәләштереү: ҡурсаҡ театры, бармаҡ уйындары, музыкалы сығыштар.

**2 класс**

Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлеге
Уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу: уҡығанда тейешле паузалар ҡуйып, терәк һүҙҙәрҙе айырып уҡыу.
Һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе.
Шиғри һәм хикәйәләү телмәре, уларҙың айырмаһы. Шаян шиғырҙарҙа һүрәтләү саралары.
Сағыштырыу – авторҙың образды һүрәтләү алымы.
Башҡорт халыҡ әкиәте һәм әҙәби әкиәт (автор әкиәте).
Әкиәттәрҙең тексын сағыштырыу: айырмаһы һәм оҡшашлығы. Әкиәт геройҙары.
Әкиәттәрҙә халыҡтың әхлаҡи ҡиммәттәре, традициялары, тормошо, мәҙәниәте. Әкиәт геройҙарының тәбиғәткә, кешеләргә, уратып алған тирә-йүн предметтарына ҡарата мөнәсәбәте.
Балаларға бағышланған һәм балалар тураһындағы әҫәрҙәр.
Әҫәрҙең төп темаһы. Әҫәрҙең төп мәғәнәһе: нимәгә өйрәтә, ниндәй сифаттар тәрбиәләй?
Бер темаға бәйле әҫәр төрҙәре: хикәйә, шиғыр, әкиәт.
Әҫәр геройҙарын баһалау, уларға дөйөм һығымта биреү.
Әҫәрҙең исемен аңлау, уның йөкмәтке менән бәйле булыуына төшөнөү. Дуҫ, дуҫлыҡ, хеҙмәт, ярҙамлашыу, хәстәрләү тигән төшөнсәләрҙе өйрәнеү.
Тыуған яҡ тәбиғәте тураһындағы әҫәрҙәр.
Тәбиғәткә бағышланған әҫәрҙәрҙе үҙ аллы уҡыу һәм айышына төшөнөү, ҡабул итеү.
Поэтик әҫәрҙәрҙең темаһы: тәбиғәт тауыштары, буяуҙары, йыл миҙгелдәре, кеше һәм тәбиғәт; тыуған ер, тыуған ил, уның тәбиғәте.
Шиғырҙы проза әҫәре менән сағыштырыу: рифма, ритм (практик яҡтан таныштырыу).
Поэтик әҫәр тыуҙырған кәйеф торошо, уларҙа сағылған әхлаҡи идеялар.
Әҫәр йөкмәткеһен иллюстрацияла сағылдырыу.

Поэтик әҫәрҙе тасуири уҡыу. Унын тауыш аша бирелгән биҙәге.
Ауыҙ-тел ижады - фольклорҙың кескәй күләмле әҫәрҙәре. Уларҙың үҙенсәлектәре. Һамаҡ – көйләп әйтелгән шиғри һүҙ. Йомаҡ – төп мәғәнәһен уйлап табыу өсөн һүҙ уйнатып, һүрәтләп әйтелгән фраза (һөйләм). Аҡыл зирәклеген, отҡорлоғон үҫтереүсе сара.
Мәҡәл – тормош тәжрибәһенән сығып, ыҡсым ғына итеп әйтелгән тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙ. Йәшәйештә ихтибарлы булыу, һәр нәмәлә ниндәйҙер мөғжизәне күрә, таба белеү һәләтен тәрбиәләү.
Йәнлектәргә бағышланған әҫәрҙәр. Текст төрҙәре: әҙәби һәм фәнни-популяр. Уларҙы сағыштырыу. Геройға характеристика: тышҡы күренешен, ҡиәфәтен, холоҡ-фигелен һәм телмәрен, башҡа геройҙар менән ниндәй мөнәсәбәттә булыуын һүрәтләү. Геройға авторҙың мөнәсәбәте.
Дуҫ булыу, һөйөү, йәнлектәрҙе яратыу, уларҙы тәрбиәләү, ҡайғыртыу тигән төшөнсәләрҙе өйрәнеү. Ата-әсәйҙәргә бағышланған әҫәрҙәр. Төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙе үҙ аллы уҡыу һәм ата- әсәйгә булған яратыу, һөйөү хистәрен күрһәтергә, еткерергә тырышыу. Кешенең бер-береһенә ынтылыуы – яратыу тойғоһо икәнлекте төшөндөрөү (ата-әсәйҙең балаһына, балаларҙың яҡындарына, туғандарына), яҡын кешеләренә яратыу, хөрмәтләү тойғоларын еткереү, улар тураһында хәстәрлек күреү.
Библиографик мәҙәниәтте тәрбиәләү. Китап – белем сығанағы икәнлекте төшөндөрөү. Китап менән эшләй белеүҙе формалаштырыу: китаптың тышы, эстәлеге, һүрәттәре. Китапханала китап һайлағанда тематик каталог ҡулланырға өйрәнеү.
Уҡыу өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәр:
бүлек. Мине уратып алған донъя.
Фәүзиә Рәхимғолова. Һанашмаҡ. «Мин бер бөртөк малай». Факиһа Туғыҙбаева. Шиғыр «Мин – уҡыусы».
Сафуан Әлибаев. Тиҙәйткес «Беҙҙең мәктәптә һәйбәт». Ғариф Ғүмәр. Һанашмаҡ «Нисә алма?»
Факиһа Туғыҙбаева. Шиғыр «Аҙна көндәре». Зөһрә Һаҙыева. Шиғыр «Һәр һөнәр ҙә яҡшы». Салауат Рәхмәтуллин. Шиғыр «Ауырыным».
бүлек. Мин һәм минең ғаиләм.
Миңлегөл Хисматуллина. Шиғыр «Минең ғаиләм». Рәсимә Ураҡсина. Йыр «Был – мин». Айһылыу Йәғәфәрова. Тиҙәйткес «Мин уяндым!». Рауил Ниғмәтуллин. Һанашмаҡ «Әгәр тырышһаң». Кәтибә Кинйәбулатова. Шиғыр «Бәлеш бешерҙем». Гүзәл Ситдыҡова. Йомаҡ «Өйҙә нисә әсәй?».
бүлек. Тыуған ерем – Башҡортостан
Хәсән Шабанов. Тиҙәйткес «Китап».
Фәүзиә Рәхимғолова. Шиғыр «Өфө буйлап экскурсия». Абдулхаҡ Игебаев. Шиғыр «Аҡтүш».
Муса Ғәли. Шиғыр «Матур һүҙ». Ҡадир Даян. Йыр «Шыршы матур».
Фаиҡ Мөхәмәтйәнов. Йомаҡ «Ҡышҡы һыуыҡ». Тамара Искәндәрова. Йыр «Ҡар яуа». Николай Сладков. Хикәйә «Тылсымлы кәштә». Рәми Ғарипов. Шиғыр «Сыйырсыҡ». Мостай Кәрим. Шиғыр «Осоп кил инде!».
Ноғоман Мусин. Хикәйә «Урманда» (повестән өҙөк).
Башҡорт халыҡ әкиәте «Эт үҙенә нисек хужа тапты?».
Башҡорт халыҡ ижады: тыуған ил, тәбиғәт, ғаилә, һөнәрҙәр тураһында һамаҡтар, йомаҡтар, мәҡәлдәр, һанашмаҡтар.
Ижади эшмәкәрлек
Уҡылған әҫәрҙәр йөкмәткеһе буйынса викториналар, кроссвордтар, башваткыстар төҙөү. Уларҙы сисеү буйынса ярыштар ойоштороу.
Әҫәрҙе төрлө эш төрҙәре аша сәхнәләштереү: класта йәки сәхнәлә декорациялар әҙерләп, ролдәргә бүлеп уҡыу, күмәкләп яттан һөйләү, хәрәкәт һәм һүҙ ярҙамында (пантомима) сағылдырыу.

Актерҙар, режиссер, рәссам-декоратор ролдәрен билдәләү. Уҡылған, йә тыңланған әҫәрҙе видеоролик ҡарап, сағыштырыу.
Әҫәрҙең йөкмәткеһен тасуири уҡып, хис-тойғоларҙы биреү. Текстың йөкмәткеһен тулыһынса һөйләп биреү. Уҡылған текстың аҙағын уйлап сығарып, һөйләп биреү.
Төҙөлөшөн һаҡлап, уйҙырма әкиәттәр уйлап сығарыу: әкиәттең башы, сюжеттың үҫеше һәм сиселеше, ваҡиға барған урынды, геройҙарҙы һүрәтләү, әкиәттең аҙағы. Әкиәтте китапсыҡ итеп йыйып ҡуйыу.
**3 класс**
Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлеге
Уҡыу күнекмәләрен нығытыу: прозаик тексты алдан әҙерлекһеҙ, поэтик әҫәрҙе тейешле әҙерлек эше атҡарып уҡыу (үҙ-аллы, йә күмәкләп).
Эстән уҡыу күнекмәләрен тексты анализлау барышында ҡат-ҡат уҡып нығытыу.
Тыуған ил тураһында. Уҡыуға тәҡдим ителгән әҫәрҙәр исемлеге: тыуған ил, тыуған ер һәм тәбиғәт. Әҫәрҙәрҙә рухи һәм әхлаҡи төшөнсәләрҙең сағылышы: тыуған илде, тыуған ерҙе һәм уның тәбиғәтен һөйөү.
Әҫәрҙең исеме уның төп идеяһын һәм йөкмәткеһен асып биреүенә төшөндөрөү. Әҫәр йөкмәткеһен иллюстрацияла сағылдырыу. Тыуған ил темаһын һынлы сәнғәттә сағылдырыу.
Фольклор (ауыҙ-тел ижады) - уның кескәй күләмле әҫәрҙәре (һамаҡтар, һанашмаҡтар, мәҡәлдәр, тиҙәйткестәр, уйҙырмалар, йомаҡтар).
Шаян фольклор әҫәрҙәре - тиҙәйткестәр, уйҙырмалар. Уларҙың үҙенсәлектәре, телмәрҙәге роле. Һүҙ менән уйын, “ваҡиғаларҙың” киреһенсә теҙелеүе – уйҙырмаларҙың нигеҙе. Һанашмаҡтарҙа төп урын ритм һәм һанауға бирелә.
Халыҡ йырҙары, уларҙың үҙенсәлектәре. Йомаҡтарҙы темалары буйынса төркөмләү.
Әкиәт – халыҡ аҡылы, уның тәрбиәүи әһәмиәте. Әкиәт төрҙәре (хайуандар тураһында, көнкүреште һүрәтләгән әкиәттәр, тылсымлы әкиәттәр). Көнкүреште һүрәтләгән әкиәттәр: геройҙары, урыны, төҙөлөшө һәм телмәре. Әкиәттә диалог. Тылсымлы әкиәттәр тураһында төшөнсә.
Әкиәттә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың көнкүреше һәм мәҙәниәте сағылышы.
Тәбиғәттең йыл миҙгеләрендәге үҙгәрештәре. Әҙәби әҫәрҙәрҙә тәбиәғәт көҙөн, ҡышын, йәйен, яҙын.
Тәбиғәт күренештәрен эстетик яҡтан ҡабул итеү. Тәбиғәтте һүрәтләүҙә сағыштырыу һәм эпитет алымдары ҡулланыу. Пейзаждың күңел торошона тәьҫире.
Йыл миҙгелдәре рәссамдар ижадында.
Балаларға бағышланған һәм балалар тураһындағы әҫәрҙәр. Уҡыу өлкәһе: әҙәби әҫәрҙә дуҫлыҡ темаһы. ”Дуҫлыҡ, хөрмәт, бер-береңә ярҙам итеү” төшөнсәләрен өйрәнеү.
Әҫәрҙең “төп геройы” тигән термин индереү. Уға баһалама (портретын, холоҡ-фиғелен һүрәтләү).
Әкиәттәр донъяһы. Фольклор (халыҡ) әкиәте һәм автор әкиәте. Уларҙы сағыштырыу.
Әҫәрҙең планын төҙөү: текстың өлөштәре, уларҙың төп темаһы. Йөкмәткегә төшөнөүҙә иллюстрация роле.
Йәнлектәргә бағышланған әҫәрҙәр. Хайуандарға бағышланған әҫәрҙәрҙең төрлөлөгө: йырҙар, йомаҡтар, әкиәттәр, хикәйәләр, шиғырҙар (әҫәрҙе һайлап алырға мөмкин). Әҙәби һәм фәнни-популяр әҫәрҙә йәнлектәрҙе һүрәтләү. Авторҙың мөнәсәбен белдереү алымдары. Йәнлектәрҙе һүрәтләгән рәссамдар менән танышыу.
Ғаилә һәм ғаилә ағзалары тураһындағы әҫәрҙәр. Ғаилә, бала саҡ, ололар һәм балалар araһындағы мөнәсәбәттәр яҙыусылар ижадында һәм фольклор әҫәрҙәрендә.
Әҙәби әҫәрҙең планын төҙөү: текст өлөштәре һәм уларҙың төп темаһы. Әҫәр йөкмәткеһен иллюстрацияла сағылдырыу.
Библиографик мәҙәниәтте тәрбиәләү. Китап – кәрәкле белем сығанағы икәнлекте төшөндөрөү. Китап элементтары: китаптың тышы, эстәлеге, һүрәттәре һәм уның аннотацияһы. Китап төрҙәре: уҡыу, әҙәби, белешмә.

Китапты тематик каталог йәки тәҡдим ителгән исемлек менән һайларға өйрәнеү. Интернет селтәренән проект эштәрҙе башҡарыу өсөн тейешле мәғлүмәтте таба белеү.
Уҡыу өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәр:
бүлек. Мине уратып алған донъя.
Кәтибә Кинйәбулатова. Һанашмаҡ «Һин ҡайҙан?». Зөлфәр Хисматуллин. Хикәйә «Уҡыуҙа ярҙам».
Мостай Кәрим. Повесть «Мәктәп хәтирәләре» (өҙөк). Айһылыу Йәғәфәрова. Тиҙәйткес «Ҡайсылар уйнай». Гөлфиә Юнысова. Хикәйә «Рәсем төшөрәбеҙ».
Вәзих Исхаҡов. Хикәйә «Минең хыялым». Фәүзиә Рәхимғолова. Шиғыр «Йөҙ юл».
бүлек. Мин һәм минең ғаиләм.
Рәис Низамов. Хикәйә «Йомшаҡ ҡулдар».
Ынйыҡай Исламғолова. Хикәйә «Өсәйемә ярҙам итәм». Рәил Байбулатов. Хикәйә «Атайыма ярҙам итәм».
Фирҙәүес Хисамитдинова. Мәҡәлә «Нимә ул шәжәрә?» (өҙөк).
Әлфинур Вәхитова. Шиғыр «Тыуған көн».
Мостай Кәрим. Повесть «Нимә ул тәбиғәт?» (өҙөк).
бүлек. Тыуған ерем – Башҡортостан
Тәнзилә Дәүләтбирҙина. Хикәйә «Мәктәп йылдары». Башҡорт халыҡ әкиәте «Әминбәк» (өҙөк).
Факиһа Туғыҙбаева. Шиғыр «Матур баш ҡалам». Рауил Бикбаев. Хикәйә «Салауат Юлаев һәйкәле». Фәрит Иҫәнғолов. Хикәйә «Өфө урамдары буйлап».
Ғилемдар Рамаҙанов. Шиғыр «Башҡортостан – бай ил». Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина. Хикәйә «Ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев». Рус халыҡ әкиәте «Төлкө һәм торна».
Башҡорт халыҡ йыры «Түңәрәк күл».
Евгений Кучеров. Хикәйә «Ҡанатлы дуҫтар») (Ф. Ғөбәйҙуллина тәржемәһе). Сөләймән Муллабаев. Шиғыр «Йомарт йәй».
Ҡобайыр «Минең Уралым» (өҙөк). Рауил Бикбаев. Хикәйә «Бөйөк Еңеү». Заһир Мәхмүтов. Әкиәт «Дүрт миҙгел».
Ижади эшмәкәрлек
Әкиәттәге кеүек тылсымлы белдереүҙәр, телеграммалар төҙөү. Әҫәрҙең презентацияһын эшләү. Китапҡа презентация төҙөү.
Көлкөлө шиғырҙың йөкмәткеһе буйынса виртуаль әкиәт-мультфильм төҙөп башҡарыу (алдан үткәрелгән әҙерлек буйынса). Художник-анималист, режиссер, оператор һәм тексты һөйләүсе актерҙар ролдәрен билдәләү.
Бирелгән тема буйынса өйрәнелгән әҫәрҙәр нигеҙендә бәләкәй генә күләмле текстар төҙөү (текст-һүрәтләү, текст-хикәйәләү).
Уҡылған әҫәрҙәр тураһында яҙма мәғлүмәт туплау (дәфтәрҙә, йә көндәлектә). Унда төп геройҙарҙың исемен, башҡарған эш-хәрәкәттәрен яҙып барыу аҙаҡтан тексты һөйләгәндә ҙур ярҙам буласаҡ. Йөкмәткегә ҡағылышлы һүрәттәр төшөрөп, уларҙың аҫтына тейешле яҙыуҙар ҡалдырыу.
Ҡыҫҡа ваҡытта үтәлә торған проект эштәре башҡарыу: “Минең ҡалам/ Минең ауылым”, “Минең исемем нимә аңлата?” һ.б.
Йылға-тау, күлдәр һәм ҡалалар исеменә ребустар, кроссвордтар төҙөү.
класс
Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлеге
Прозаик һәм поэтик әҫәрҙе әҙерлекһеҙ ҡысҡырып уҡыу. Рәсми һәм уҡып, өйрәнеү өсөн бирелгән текстарҙы уҡыу.
Тыуған ил тураһында. Тыуған илде, тыуған ерҙе һәм уның тәбиғәтен һөйөү – әҙәбиәттә мөһим урын алған. Илдең, тыуған яҡтың үткәнен белеү, уның менән ғорурланыу, бөгөнгө йәшәйеште тағы ла яҡшыраҡ итеү - әҫәрҙәрҙең төп идеяһы булып тороуҙы төшөндөрөү.

Әҫәр исеменең төп идеяны һәм әҫәрҙең йөкмәткеһен асып биреүҙә тотҡан урынын төшөндөрөүҙе дауам итеү. Тыуған ил тураһындағы әҫәрҙәрҙә һүрәттәрҙең, репродукцияларҙың уйнаған роле.
Әҫәрҙе тасуири уҡыуҙа ҡулланылған саралар: интонация, темп, ритм, логик баҫым.
Төшөнсәләр: көләмәс, эпос, әҫәрҙең төҙөлөшө (башы, ваҡиғаларҙың бер-бер артлы теҙелеп үҫеше (завязка), иң төп нөктәгә етеү ваҡыты (кульминация), сиселеүе (развязка), эпизод, метафора.
Фольклор (ауыҙ-тел ижады) - уның кескәй күләмле әҫәрҙәре (һамаҡтар, һанашмаҡтар, мәҡәлдәр, тиҙәйткестәр, уйҙырмалар, йомаҡтар). Йомаҡ төрҙәре менән таныштырыу.
Әкиәт төрҙәре (хайуандар тураһында, көнкүреште һүрәтләүсе, тылсымлы әкиәттәр).
Әкиәттәрҙең геройҙары, ваҡиға барған урыны, төҙөлөшө һәм телмәре. Әкиәттең планын төҙөү.
Әҙәби әкиәт. Башҡорт яҙыусыларының әкиәттәре. Автор әкиәттәренең үҙенсәлектәре: сюжет, герой, теле. Аннотация төҙөү.
Халыҡ йырҙары, уларҙың үҙенсәлектәре, темаһы. Йырҙар уятҡан хис-тойғолар. Ҡобаир – мөһим тарихи ваҡиғаға йәки батырҙарҙы данлауға бағышланған шиғри әҫәр, көйһөҙ йыр. Уларҙы халыҡ быуаттар аша һаҡлап ҡала алған. Эпос – батырлыҡты хикәйәләп яҙылған әҙәби әҫәр төрө. “Урал батыр” эпосы.
Ҡобаир һәм эпостың темаһы, теле.
Репродукция - фольклор әҫәрҙәрен һүрәтләү сараһы.
Лирик әҫәрҙәр – авторҙың хис-тойғоларын уҡыусыларға еткереү сараһы.
Тәбиғәт күренештәре поэттарҙың һәм яҙыусыларҙың әҫәрендә (Гөлфиә Юнысова, Рәшит Ниғмәти, Мәжит Ғафури, Факиһа Туғыҙбаева һ.б.). Рәссамдар ижадында пейзажда (Александр Бурзянцев, Әхмәт Лотфуллин һ.б.) әҙәби әҫәрҙәрҙең сағылышы. Һүрәтләү тексында (эпитет, сағыштырыу, йәнләндереү) һәм һынлы сәнғәттә, йәғни һүрәттә (төҫ, композиция) пейзаж нисек сағылдырыла, уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға өйрәтеү.
Хикәйә – ысынбарлыҡты сағылдырыу, хәбәрләү, хикәйәләү төрө. Уның төҙөлөшө (башы, ваҡиғалар үҫеше, иң ҡыҙған мәле һәм сиселеше). Хикәйәнең сюжеты: төп ваҡиғалар, төп геройҙар, башҡа ҡатнашыусылар; әҫәрҙе һөйләүсене авторҙан айырыу.
Эпизод – хикәйәнең бер өлөшө.
Һүрәтләү һәм фекерләү текстарының айырмаһы.
Йәнлектәргә бағышланған әҫәрҙәр. Кешенең хайуандарға булған мөнәсәбәте: тоғролоҡ, ҡайғыртыу, хәстәрләү, яратыу. Хикәйәләүҙең үҙенсәлектәре: тема, геройҙар, ваҡиғаларҙың ысынбарлыҡҡа тап килеүе, композиция, ваҡиға барған урынды һүрәтләү .
Балаларға бағышланған һәм балалар тураһындағы әҫәрҙәр. Әҙәби әҫәрҙең төп геройы: йәшәгән осоро һәм урыны, тышҡы торошо, ҡиәфәте һәм холоҡ-фигел сифаттары. Әҫәрҙең тарихи ваҡиғаларға нигеҙләнеп, шул дәүерҙе сағылдырып яҙылыуы: ауыл балалары яҙмышы, һуғыш балалары. Сюжеттың төп ваҡиғалары, геройҙарҙың уларға ҡарата мөнәсәбәте. Һуғыш ваҡытында әхлаҡи сифаттар сағылышы.
Көлкөлө әҫәрҙәр (көләмәс). Сюжеттың көлкөлө, мәрәкәле, мәҙәкле булыуы. Текстың үҙенсәләге булып арттырыу, шаяртыу тора.
Библиографик мәҙәниәтте тәрбиәләү. Уҡыу эшмәкәрлегендә төп ҡиммәт булып әҫәрҙе аңлап, уның йөкмәткеһенә төшөнөп уҡыу тора. Китап – мәҙәниәттең айырым бер төрө икәнлекте аңлатыу. Уҡыуға тиклем китап тураһында алдан мәғлүмәт ала белергә өйрәтеү: тышы, йөкмәткеһе, аннотацияһы, баш һүҙе, һүрәттәре. Китап уҡыусы үтәй торған талаптар. Йәш кимәленә тап килгән һүҙлектәр, энциклопедиялар ҡулланыу.
Рәсәйҙәге тәүге китаптар тураһында дөйөм төшөнсә: Кирилл һәм Мефодийҙың беренсе славян әлифбаһы. Ҡол Ғәлинең “Ҡисса һәм Йосоп” – башҡорт һәм татар халыҡтарының тәүге яҙма китаптары. В. В. Катаринскийҙың (1892 г.) тәүге “Башҡорт әлифбаһы”.

Әҙәбиәт ғилеме тураһында ябай ғына төшөнсәләр биреүҙе дауам итеү һәм уҡыу барышында әҫәрҙәрҙе тикшергәндә ҡулланыу: жанрҙар төрлөлөгө, сәсмә фольклор, экиәт, хикәйә, ҡобайыр, шиғыр, төп герой, төп идея, портрет, пейзаж, ритм, рифма.
Сағыштырыу, йәнләндереү, метафораның башҡорт әҙәбиәтендә милли үҙенсәлеге.
Уҡыу өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәр:
1 бүлек. Мине уратып алған донъя. Зәйнәп Бейешева. Шиғыр «Хәйерле көн!». Факиһа Туғыҙбаева. Хикәйә «Тәмле һүҙҙәр».
Валентина Осеева. Хикәйә «Тылсымлы һүҙҙәр» (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). Нажия Игеҙйәнова. Хикәйә «Уҡыу – ул хеҙмәт!».
Муса Ғәли. Һанашмаҡ «Сәғәт нимә ти?».
Рәми Ғарипов. Шиғыр «Тыуған тел – һинең донъяң». Зәйнәп Бейешева. Хикәйә «Талҡаҫ күле» (повестан өҙөк). Мәжит Ғафури. Хикәйә «Аҡ күл».
«Шихандар – тәбиғәт ҡомартҡылары» (“Башҡорт энциклопедияһы”нан фәнни-популяртекст).
2 бүлек. Мин һәм минең ғаиләм.Рәшит Ниғмәти. Поэма «Нимә ул Ватан?» (өҙөк).
Ризаитдин Фахретдин. Хикәйә «Тәрбиәле бала».
Башҡортостан Республикаһының халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллиндың «Өс ҡатын», «Әсәйем портреты» һүрәттәре (таныштырыу һәм һүрәтләү). Альбина Рамаҙанова. Хикәйә «Ялҡаулыҡ кешене боҙа». Башҡорт халыҡ экиәте «Олатайым васыяттары».
Марсель Сәлимов. Көлкөлө хикәйә «Алдашыу – насар ғәҙәт».
3 бүлек. Тыуған ерем – Башҡортостан
Луиза Ихсанова. «Башҡортостан – йырҙар иле» (фәнни-популяр текст).
Йыр «Шаймуратов генерал» (Ҡадир Даян һүҙҙәре, Заһир Исмәғилев музыкаһы). Рәис Әфләтунов. Хикәйә «Башҡорт бейеүе».
Василий Власов. «Башҡорт балы» (фәнни-популяр текст).
«Ҡымыҙ» (фәнни-популяр текст).
Башҡорт халыҡ экиәте «Ҡурай».
«Асылыкүл – Башҡортостан ынйыһы (фәнни-популяр текст).
Башҡорт халыҡ экиәте «Ирәндек».
«Урал батыр» эпосы (өҙөк).
Ҡобайыр «Уралда» (өҙөк).
Көләмәс – башҡорт фольклорының жанры.
Башҡортостан Республикаһының халыҡ рәссамы Александр Бурзянцевтың ижады.
Пейзаждар: «Ҡариҙел», «Ҡыш, һау бул!» (танышыу һәм һүрәтләү).
«Башҡорт ҡалалары» (фәнни-популяр текст).
Мостай Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында»(өҙөк, 1 өлөшө).
Йомаҡтар, мәҡәлдәр, һанашмаҡтар, телтөҙәткестәр, тиҙәйткестәр.
Ижади эшмәкәрлек
Һүрәтләү сараларын билдәләй белеү. Тикшерелгән әҫәрҙәр нигеҙендә текстарҙы төҙәтеү, йә уларҙы уйлау (һүрәтләү тексы, хикәйәләү тексы, фекерләү тексы).
Сюжеттың үҫешен алдан күҙаллау. Персонаждың эш-ҡылығына ҡарата һорауҙарға яуап биреү, баһалама төҙөү. Әҫәрҙе тасуири уҡыу саралары аша аныҡлау, асыҡлау. Уҡылған әҫәрҙең аҙағын уйлап сығарып, тамамлап ҡуйыу.
Бирелгән план буйынса текст төҙөү; төп геройҙың портретын һүрәтләү моделен төҙөү, йә бирелгән модель буйынса уның портретын уйлап сығарыу.
Ижади эштәр портфолияһын төҙөү. Шәхси йәки бергәләп башҡарған проект эштәренең презентацияһын эшләү.
Уҡылған әҫәр буйынса текст төҙөү.
Әҙәби әҫәргә, ул һүрәтләнгән иллюстрацияларға таянып, төрлө йәштәге уҡыусыларға уның йөкмәткеһен еткереү маҡсатында үҙ-аллы телдән, йәки яҙма хәбәрләмә (текст) төҙөү.
Кроссвордтар, ребустар, башватҡыстар төҙөү.

“Минеӊ ятатҡан геройым”, “Башҡорттарҙыӊ милли кейеме”, “Өләсәйем рецептары”, “Башҡортостандыӊ тәбиғи ҡомартҡылары” һ.б. темаларына проект эштәр башҡарыу.

**“Туған (башҡорт)теле” предметы программаһын үҙләштереү буйынса билдәләнгән һөҙөмтәләр.**
**Шәхси сифаттарҙы үҫтереү:**
- донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү;
- үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу;
- телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү;
- башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.
**Метапредмет һөҙөмтәләр:**
- уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
- башланғыс класс уҡыусыһының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
- уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.
**Предмет һөҙөмтәләре:**
- башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә;
- (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.
**Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү:**
А. Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)
Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы
Һөйләү телмәрендә:
- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы.
Тыңлап аңлауҙа:
- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы.
Уҡыуҙа:
- өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, -текстан кәрәкле информацияны табыу.
Яҙма телмәрҙә:
- яҙыу техникаһына эйә булыу;
- үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.
Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү)
- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм - грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.
Социомәҙәни компетенция географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;
Б. Танып белеү сфераһы:
- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
- башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;

- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;
- үҙ-үҙеңде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;
В. Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:
- башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү; балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.
- Г. Эстетик сферала:
башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү; балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.
Д. Хеҙмәт сфераһында:
- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.
предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре.

Башланғыс мәктәптең беренсе класында тәү башлап башҡорт телмәрен тыңларға, ишетергә,һөйләргә һәм уҡырға, яҙырға өйрәтеү; башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнеү һәм уҡыу процесында социаль тәжрибә туплау, әхлаҡи тәрбиә биреү уҡыу программаһы нигеҙендә тормошҡа ашырыла.Башҡорт грамотаһына өйрәтеү һәм башҡорт телен өйрәнеү түбәндәге маҡсаттарҙы ҡуя:
- тыңлау( ишетеү), һөйләү, уҡыу һәм яҙыу күнекмәләренә эйә булыу;
-лексика, фонетика, грамматика, синтаксис өлкәһендә башланғыс тел төшөнсәләрен, күренештәрен, ҡанундарын үҙләштереү;
-башҡорт телендә-республиканың дәүләт телендә-аралашырға, үҙ-ара мөнәсәбәт ҡорорға өйрәнеү;
-башҡорт теле аша халыҡтың мәҙәниәтен(ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, ауыҙ-тел ижадын) өйрәнеү һәм үҙләштереү;
Яңы быуын стандарттарының талаптарына ярашлы, бала, башҡорт теле буйынса белем алыу менән бер рәттән, уңышлы уҡыусы һәм социаль йәшәү шарттарына яраҡлы тормош тәжрибәһе туплаған эшмәкәр кеше сифаттарына эйә булған шәхес итеп тәрбиәләнергә тейеш.
1-се класс
«Башҡорт теле» программаһын өйрәнеү процесында уҡыусы өйрәнә:
Предмет буйынса белем алыуҙа
-һүҙҙәрҙе мәғәнәүи яҡтан төркөмләргә (предметтың атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр);
-һөйләм төрҙәрен билдәләргә (хәбәр, һорау, өндәү) һәм уларҙы тейешле интонация менән уҡырға; һөйләмде дөрөҫ яҙырға (баш хәреф, аҙағында — тыныш билдәләре);
-үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе айыра, таный белергә; һөйләмде күсереп яҙғанда ярҙамсы һүҙҙәрҙе (да-дә, та-тә, ла-лә; ғына-генә, 'кына-кенә) билдәләргә һәм дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;
-предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәрҙе уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәргә айыра белергә; кешенең исемен, фамилияһын, ер-һыу атамаларын, хайуан ҡушаматтарын баш хәрефтән яҙырға;
-өндәрҙе һуҙынҡы, тартынҡыларға айырырға, нәҙек-ҡа- лын һуҙынҡыларҙы, парлы яңғырау-һаңғырау, парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы дөрөҫ билдәләргә, график рәүештә тамғаларға;
-һүҙҙең (3—4, 5—6 өндән торған) өн моделен төҙөргә;
6—7, 7—8 һөйләмдән торған (30—35 һүҙ) тексты күсереп яҙырға; 25—30 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙа белергә;
-һүҙҙе ижеккә бүлергә, уны юлдан юлға күсерә белергә;
о — ө, у — у, э (һүҙ башы) хәрефтәре; йә, Сш, йу, йе (һүҙ уртаһы) йо, йы ҡушымсалары булған һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға; һүҙ башында я, е, ё, ю хәрефтәре менән булған 2—3, 3—4 хәрефтән торған һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға; тартынҡы өндөң аҙағында килгән нәҙеклек билдәһен (ь) рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә (3—4, 4—5 хәрефле) дөрөҫ яҙыу.

Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереүҙә
-уҡытыусыға, класташына, өлкәндәргә үтенес менән өндәшергә;
-уҡыу объектын өйрәнеү процесында күҙәтергә, сағыштырырға, анализларға һәм һығымта яһарға;
-аралашыу оҫталығын шымартыу: тыңларға, яуап бирергә; һорарға, кеше фекерен ихтирам итергә, үҙеңдекен — яҡларға;
диалог, монолог ҡора белергә
-мәғлүмәт алыу сығанаҡтары менән эш итә белергә;
алған мәғлүмәтте эшкәртә белергә, маҡсатҡа ярашлы ҡулланырға;
-мәғлүмәт алыу маҡсатында һорау һөйләм ҡорорға;
-парлап, төркөмдә эшләгәндә этикет ҡағиҙәләрен күҙәтергә; эште планлаштырырға, уны тормошҡа ашырырға;
3—4, 4—5 һөйләмдән торған иғлан, ҡотлау, белдермә (записка) яҙабелергә.
Шәхси сифаттарҙы үҫтереүҙә
-уҡыу процесында белем алыуға яуаплы ҡарарға; тиҫтерҙәре» уҡытыусыға ҡарата ихтирамлы булырға;
-мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарарға;
-Тыуған ил, ер, тел төшөнсәләре тураһында ҡайғыртыуса булырға;
һау-сәләмәт йәшәү рәүешен үҙләштерергә.
2-се класс
1. Предмет буйынса белем алыуҙа
һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса төркөмләргә. Уларға тейешлеһорау ҡуйырға. Предметтың атамаһын, хәрәкәтен, билдәһен белдереүсе һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә урынлы ҡулланырға;
-һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөргә һәм уны хәрефтәр менән яҙырға;
-һөйләмдәр төҙөргә (телдән һәм яҙма), уларҙы тейешле һүҙ өҫтәп тулыландырырға;
-һөйләмдәрҙе әйтелеү маҡсатына ҡарап хәбәр, өндәү, һорау һөйләмдәргә айырырға. Уларҙы тейешле интонация менән уҡырға;
-һөйләмдең эйәһен, хәбәрен (баш киҫәктәрен) айыра белергә;
-башҡорт теленең дөрөҫ яҙылыш ҡанундарын, ҡағиҙәләрен үҙләштерергә: У у — Үу, Оо — Өө, Ээ(е), Ыы хәрефле һүҙҙәр, һүҙҙә йә. йө, йу, ие (һүҙ уртаһы), йо, йы ҡушымсалары, һүҙ башында Яя, Ее, Ёё, Юю хәрефтәре, һүҙ башында В хәрефе, ярҙамсы һүҙҙәрҙең (һәм, менән.; да — дә, ҙа — ҙә; та — тә, ла — лә; гына — генә, -эсына — кенә) айырым яҙылышы. Һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәһе (нөктә, һорау, өндәү) ҡуйырға. Кеше исем-фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын, ер-һыу атамаларын һәм һөйләмдең башындағы һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙырға;
8—10 һөйләмдән торған (35—40 һүҙ) тексты күсереп яҙырға;
30—35 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙа белергә; һүҙҙе ижеккә бүлергә, уны юлдан юлға күсерә белергә;
-тексты аңлы уҡырға һәм уның йөкмәткеһе менән бәйләнгән эштәрҙе эҙмә-эҙлекле үтәргә. Уның нигеҙендә ҡоролған һөйләшеү йәки тикшереү эштәрен үтәргә;
-уҡыу ситуацияһына ярашлы диалогта ҡатнашырға.
2. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереүҙә
-үҙ аллы уҡырға, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырырға: белемде, мәғлүмәтте эҙләү күнекмәләре булдырырға (һорау, белешеү, мәғлүмәти сығанаҡтар менән эш һ. б.); тикшеренеү-эҙләәШ неү эшен планлаштырырға; парлап, төркөмләп, команда менән эшләргә;-алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәргә;-билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта һ. б. график схема, модель, таблица ярҙамында теркәргә;-диалог ҡорорға, уҡыу материалын тикшерергә, анализларға;һығымта яһарға;
-мәҙәниле аралашыу этикетына өйрәнергә: әңгәмәсене тыңлай, хуплай белергә, аңламағаныңды итәғәтле итеп һорашырға, яуап алырға һәм рәхмәтеңде белдерергә; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткерергә, уны яҡлай белергә.

3. Шәхси сифаттарҙы үҫтереүҙә
-үҙ аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
тиҫтерҙәренә, уҡытыусыға, ата-әсәһенә ҡарата ихтирамлы булырға;
-мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булырға;
-Тыуған илде яратырға; ерҙе, телде һаҡларға;
-һаулыҡты һаҡларға;
-тиҫтерҙәренҙә, уҡытыусыларға, яҡындарынҙа, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға.
3 –сө класс
1. Предмет буйынса белем алыуҙа
-һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙ уйлап табырға;
-һүҙҙең өлөштәрен (тамыр һәм ялғау, яһаусы ялғау һәм яһалма һүҙ) айырырға;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙе танырға. Уларҙы башҡа оҡшаш һүҙҙәрҙән айырырға;
-тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр, парлы-парһыҙ, яңғырау-һаңғырау, сонор тартынҡы өндәр, һүҙҙә сиратлашып килеүсе тартынҡылар тураһында һөйләй белергә;
-һүҙгә фонетик анализ яһай белергә;
-ҡушма һүҙҙәрҙе танырға, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;
-үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе танырға һәм уларға дөрөҫ ялғау ҡуша белергә;
-һүҙ төркөмдәрен (предметтың атамаһын, билдәһен хәрәкәтен белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе) таба белергә;
-һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белергә;
-сюжетлы һүрәт, һораузар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә;
2. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереүҙә
-үҙ аллы белем алырға, мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә;
-дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә; дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тоторға ( һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;
-эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә;
-тиҫтерҙәрең һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;
-эшләгән эшеңде дөрөҫ баһаларға, кәрәк икән, төҙәтмәләр индерергә.
3. Шәхси сифаттарҙы үҫтереүҙә
-үҙ аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
-тиҫтерҙәренҙә, уҡытыусыларынҙа, ата-әсәгә, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;
-мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булырға;
-Тыуған илде яратырға; ерҙе, телде һаҡларға;һаулыҡты ныҒытырға;
-ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;
-кеше менән аралашыу этикетын үҙләштерергә;
4-се класс
1. Предмет буйынса белем алыуҙа
-өндәрҙе төркөмләргә, һуҙынҡылар һәм тартынҡылар таблицаһына таянып, уларға тулы характеристика бирергә;
-һүҙ төркөмдәрен мәғәнәһе һәм һорауы буйынса айыра гә;
-өйрәнелгән орфограммаларҙы эсенә алған, 70—80 һүҙҙән торған тексты каллиграфия талаптарына ярашлы грамоталмя; белергә;
-һүҙҙе яһалышы һәм һүҙ төркөмдәре буйынса тикшерә бш гө, һүҙгә фонетик һәм морфологик анализдар эшләргә; 1
-һөйләмгә тулы синтаксик анализ: интонация буйынёащ лəм төрөн билдәләү, баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табыу, һөйләмдемәғәнәһе яғынан бәйле һүҙбәйләнештәргә тарҡата белергә;

-70—80 һүҙлек текст буйынса изложение яҙырға, инша ижад итергә, тирә-яҡтағы күренештәрҙе һүрәтләп, хәл-ваҡиғалар эҙмә-эҙ бәйән итеп, текст төҙөп яҙа белергә.
2. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереүҙә
-уҡыу процесына яуаплы ҡарарға, маҡсат ҡуя, эште планлаштыра белергә, уҡыу мәсьәләләрен сисә белергә;
-теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт тупларға, эҙләнеү эше альш барырға, уның буйынса презентация эшләй белергә;
-мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булырға, үҙ итергә, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышырға, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белергә;
-билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштерергә һәм телмәрҙә ҡуллана белергә.
3. Шәхси сифаттарҙы үҫтереүҙә
-үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарарға;
-мәктәп һәм класс йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл булырға;
-һаулыҡты һаҡларға; тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға;
-Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белергә, уларҙы һаҡларға, халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнергә, таратырға.

**“Туған (башҡорт)теле” предметын уҡытыу программаһының йөкмәткеһе**

1 класс

Әлифбаға тиклемге осор

1. Предмет. Тирә-йүндәге предметтарҙы өйрәнеү. Улар тураһында түбәндәге алгоритм буйынса һөйләү:
- предметтың исеме (аталышы);
- предметтың формаһы (йомро, түңәрәк, оҙонса, шаҡмаҡ, квадрат, тура дүртмөйөш, өсмөйөш, ялпаҡ һ. б.);
- предметтың тышҡы торошо (шыма, ҡытыршы, йомшаҡ, ҡаты һ. б.);
- предметтың төҫө;
- предмет нимәнән эшләнгәнен билдәләү;
- предметтың тормошта ҡулланылышы.
Предметты өйрәнеү, күҙәтеү. Уны башҡа объект менән сағыштырыу, уға оҡшаш объекттар табыу. Уларға хас оҡшаш һыҙаттарҙы билдәләү. Объекттың төп, үҙәк үҙенсәлектәрен табыу, билдәләү. Уларҙы ваҡ, төп булмаған үҙенсәлектәрҙән айыра белеү. Предмет һәм уға ҡағылышлы күренеш буйынса үҙ фекеренде белдереү.
Предметты өйрәнеү ысулдарын табыу, билдәләү һәм һығымта яһау (предметты өйрәнеү ысулы — уны ҡулдар менән тотоп ҡарау, күҙҙәр менән күреү). Фекерләү, аң-зиһен формалаштырыу ысулдарын (күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, баһалау, йомғаҡлау) үҙләштереү.
2. Һүҙ тураһында төшөнсә.
а) Һүҙ. һүҙҙең исем атау функцияһы. Уның телмәрҙәге әһәмиәте. Һүҙҙең әйтелешен тыңларға һәм ишетергә өйрәнеү, уны күҙәтеү. Һығымта: һүҙҙе әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ.
б) Предметтың исемен белдергән һүҙҙәр. Предмет - һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. Предмет - һүҙҙәр йыйыу, һүҙ төркөмө.
Сюжетлы һүрәт. «Мажаралы футбол». «Спорт» темаһына ҡағылышлы предмет - һүҙҙәр туплау. Ул һүҙҙәрҙе ҡулланып, һүрәт буйынса һөйләшеү ҡороу, уларҙы баланың лексиконына индереү. һүрәттәге сюжетҡа оҡшаш ситуацияларҙа юмор, шаяртыу

элементтарын ҡулланыу; сетерекле, көтөлмәгән хәл - ваҡиғаларҙан сығыу юлдарын таба белергә өйрәтеү. Һаулыҡ һаҡлау, спортка ылыҡтырыу мәсьәләләренә әһәмиәт биреү.
в) Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Хәрәкәт - һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. Һүҙбәйләнеш (предмет - һүҙ + хәрәкәт - һүҙ: уҡыусы яҙа, бала уйнай, ямғыр һибәләй һ. б.

Сюжетлы һүрәт менән эш. «Хәрәкәттә бәрәкәт». Балаға һәр кем үҙенсә матур булыуын күрһәтеү. Үҙ - үҙеңде яратырға, тышҡы ҡиәфәтең, һаулығың тураһында ҡайғыртып йәшәргә кәрәклеген аңғартыу. Хәрәкәт организм өсөн файҙалы икәнен төшөндөрөү.

г) Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Билдә - һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. һүҙбәйләнеш (билдә - һүҙ + предмет - һүҙ: матур һүрәт, һипкелле ҡыҙ, уңған әсәй, япраҡлы ағас; билдә - һүҙ + хәрәкәт - һүҙ: яй йүгерә, ҡапыл ырғыны, матур яҙа, шәп уҡый, күп һөйләй, насар күрә һ. б.

Сюжетлы һүрәт менән эш. «Көҙгө урманда». Көҙгө урманды һүрәтләп һөйләгәндә билдә - һүҙҙәрҙе ҡулланып һөйләү. һөйләм һыҙмаһына ярашлы көҙ тураһында телдән инша төҙөү (2—3, 3—4 һөйләм).

Тикшереү эше. Балаларҙың һүҙ төркөмдәрен нисек үҙләштереүҙәрен күҙаллау. Предмет - һүҙҙәр, хәрәкәт - һүҙҙәр, билдә - һүҙҙәр әйтеп, һүҙ схемаларын төшөртөү (ҡалаҡ, сынаяҡ, айыу, ҡуян, сейә, алма, саған, уҫаҡ; тора, бешерә, иләй, түгә, бара, илай, һанай; тоҙло, еүеш, һыуыҡ, һөйкөмлө, егәрле һ. б.; малай бейей, апай һөйләй, ел иҫә, ҡыҙыл сәскә, йомшаҡ ҡул, сәнскеле үлән, һимеҙ һарыҡ, ҡурҡаҡ ҡуян, ҡысҡырып һөйләй, аҙ яҙған, матур кейенгән һ. б.
3. Һөйләм.
һөйләм тураһында төшөнсә. һөйләмдең һыҙмаһы. һөйләмдең башы. һөйләмдең аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау,өндәү).
Бәләкәс һәм ҙур һөйләмдәр. (Көҙ килде. Матур көҙ килде. һөйләмде киңәйтеү, тулыландырыу. һөйләмгә һүҙ өҫтәү тамғаһы.

Сюжетлы һүрәт. «Ҡоштар менән хушлашыу». Көҙгө күренештәргә иғтибарлы булырға, ҡоштар тормошо, көҙөн тыуған яҡтары менән хушлашыу күренештәрен күҙәтергә күнегеү һәм күргән-белгәндәргә таянып һөйләү, тәбиғәт матурлығы аша баланың эске психик торошон ыңғай яҡҡа көйләргә, унан көс - энергия алырға өйрәтеү.

4. Ярҙамсы һүҙҙәр.
а) Һәм, менән ярҙамсы һүҙҙәре. Улар менән һөйләмдәр төҙөү.
б) Да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында тамғалау.
в) Ғына-генә, ҡына-кенә ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында тамғалау.
Сюжетлы һүрәт. «Бесәй менән булған мажара». Бесәй менән булған мажараларҙы эҙмә-эҙлекле итеп тасуирлап һөйләргә; мәрәкәле, ҡыҙыҡ күренешкә юмор, шаярыу менән ҡарарға күнегеү, кешенең һиңә ҡарата әйтелгән шаяртыу һүҙҙәрен аңлай белеү.

Тикшереү эше. һөйләмде тыңлау, ишетеү һәләтен һәм һыҙма ярҙамында күрһәтеү күнекмәләренең кимәлен күҙаллау. һөйләм әйтеү һәм уның һыҙмаһын һыҙҙырыу. (Әсмә сәсен урә. Әсмәнең күлдәге матур ғына. Ул сәсен тарай ҙа тарай.

5. Һүҙ һәм өн.

а) Өн тураһында төшөнсә. һүҙҙе тыңлау. һыҙма ярҙамында һүҙҙә һәр өндөң урынын билдәләү - һүҙҙең өн моделен төҙөү. Өн модель буйынса һүҙҙе уҡыу. Һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙҙәр уйлау, уны моделгә урынлаштырып ҡысҡырып уҡыу.

Сюжетлы һүрәт. «Йәшенмәк уйнағанда». Телмәр үҫтереү. Уйнағанда һанашмаҡтар ҡулланыу.
б) Өндәрҙе тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәргә айырыу. Өндәрҙе күҙәтеү, тикшеренеү эше үткәреү һәм уларҙы айырыу ысулдарын, юлдарын билдәләү. Балалар тарафынан асыласаҡ ысулдар: өндө ҡысҡырып әйтеп тыңлау һәм өн әйтелгән мәлдә ҡаршылыҡ осрау-осрамауын тойомлау. Өндө әйткәндә ауыҙ ҡыуышлығынан өрөлгән һауаға ҡаршылыҡ ҡуйылыу осраҡтарын күҙәтеү: ирендәр ҡымтыла, тел аңҡауға йәбешә, аҫҡы һәм өҫкө рәт тештәр тоташа. Шулай итеп үпкәнән өрөлгән һауаға ҡаршылыҡ тыуа. Тимәк, әйтелгән өн тартынҡы, уны һуҙып әйтеп булмай. Өндө әйткәндә үпкәнән өрөлгән һауа ҡаршылыҡҡа осрамай иркен сыҡһа, өн — һуҙынҡы. Тартынҡы, һуҙынҡы өндәрҙе айырып тамғалау (тартынҡы — шаҡмаҡ, һуҙынҡы — түңәрәк).
Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. һүҙҙе ижеккә бүлгәндә эш итеү ысулдарын асыу (ритмлап ҡул сабыу, ҡәләм менән партаға һуғыу, аяҡ тибеү, эйәккә ҡул һыртын ҡуйып тойомлау һ. б.), һүҙҙең өн моделендә уны символик рәүештә ижеккә бүлеү. һүрәт менән эш. Телмәр үҫтереү. «Ҡымыҙ — файҙалы эсемлек». Ата-бабаларҙың кәсеп-һөнәрҙәре менән танышыу, өйрәнеү.
Баҫым. Баҫым һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенә төшә. Башҡорт телмәре музыкаль һәм яғымлы. Телмәр үҫтереү. «Өйөрҙә бер күк ҡолон, ҡойроғо — бөҙрә толом». Һүрәтләү саралары (сағыштырыу): мороно ебәк бәрхәт, күҙҙәре янар йондоҙ, ҡойроғо бөҙрә толом, тояҡтары нескә талдай, ҡолаҡтары ҡайсы төҫлө һ. б.
в) Нәҙек һәм ҡалын өндәр.
Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу, һығымта яһау. Саф башҡорт һүҙенең беренсе ижеге нәҙек әйтелешле булһа, ҡалған ижектәре лә нәҙек әйтелешле. Саф башҡорт һүҙенең тәүге ижеге ҡалын булһа, ҡалған ижектәре лә ҡалын. Ҡалын, нәҙек өндәрҙе айырып тамғалау (ҡалын өндәр — зәңгәр, нәҙек өндәр - һары төҫтә). һүҙҙәрҙе өн моделе буйынса уҡыу.
г) Һаңғырау һәм яңғырау тартынҡылар.Пар тартынҡылы һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу. Шау (һаңғырау) йәки тауыш (яңғырау) ярҙамында яһалған өндәр. һаңғырау һәм яңғырау тартынҡыларҙы тамғалау.
1-се синыф
Хәреф — өндөң тамғаһы. Алфавит.
Бик борон яҙма телмәр булмағанда кешеләр нисек аралашҡан? Алфавиттың хәрефтәрен өйрәнеү кәрәкме? Ни өсөн?
[ә] өнөн тамғалау. Әә хәрефе. Әә хәрефен яҙыу. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» укыу): шәм, тәм, ләм, мәл, һәм, кәм, сәй, әсәй, әтәс, Әнәс, Әсмә, әрем, кәмә, кәҙә, бәлә.
Телмәр үҫтереү. «Күл буйында».
[а] өнөн тамғалау. Аа хәрефе. Аа хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу(«тишекле» уҡыу): ал, ат, аш, ас, аҡ, ай, ала, ата, аша, аса, аға, баш, таш, ҡаш, ҡар, май, бай, шар, зар, тар, атай, ағай, апай, ашай, арый, арыш, алҡа, арпа, алма, арҡа, бара, бала, тала, ҡала.
[ө] өнөн тамғалау. Өө хәрефе. Өө хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙен моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): өс, өт, өй, өн, өр, һөй, йөй, сөй, көй, көн, төн, өкө, бөрө, көлтә, төйөн, бөйөк, төлкө, бөркөт, һөлөк.
[о] өнөн тамғалау. Оо хәрефе. Оо хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): он, ос, оло, ошо, оро, ҡош, тоҙ, боз, ҡор, тор, ойоҡ, осоҡ, отош, ҡоро, һоро, орсоҡ, борон, болон, ҡором, ҡорот, толом, морон, солон, ҡозоҡ. Һуҙынҡылар таблицаһын төҙөү.

[ү] өнөн тамғалау. Үү хәрефе. Үү хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): үр, үт, үҫ, үрә, үтә, үҫә, бүл, күл, сүл, күс, үлән, һүз, үгеҙ, үтек, бүре, бүләк, күнәк, йүләр, йүтәл, гүзәл. Телмәр үҫтереү. «Себештәрем, бәпестәрем». [у] өнөн тамғалау. Уу хәрефе. Уу хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): уй, уҡ, ун, ур, ул, ут, ус, ура, ута, ҙур, ҡура, тура, бура, Урал, уҫал, уҫаҡ, ураҡ, усаҡ, утын, упҡын, урғыс, урман, уңған, уртаҡ.

[л] өнөн тамғалау. Лл хәрефе. Лл хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: ал, ул, ала, оло, ләлә; Ләлә ал — ала. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): ал, ул, ил, ала, илә, оло, пул, тул, бил, кул, Ләлә, алты, алҡа,иләк, улән, олон, өлөш, илек.

[м] өнөн тамғалау. Мм хәрефе. Мм хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: мал, мул, мәл, ләм; Ул алма ала. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): мал, мәл, мул, ләм, өмә, алма, Милә, миләш, Морат. Тартынҡылар таблицаһын төҙөй башлау. [т] өнөн тамғалау. Тт хәрефе. Тт хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: таш, тул, тиш, ата, ута, утә, отам, тота; Милә, тутәл ута). Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): ат, ут, ит, от, өт, ут, тал, тәм, тут, тот, тир, таш, туш, төш, ата, ута, өтә, утә, тора, тара, таба, тала, тирә, тугә, тубә, тибә, тота, төшә, тишә, тана, торба, торна, төлкө, тирмә, тишек, төтөн, тирәк, тутәл. Телмәр үҫтереү. «Төлкө менән торна» әкиәте.

[ш] өнөн тамғалау. Шш хәрефе. Шш хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: шәл, шул, ошо, таш, төш, тишә, тушә; Урал, аш аша. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): шат, шар, шәл, шәп, шом, таш, ҡаш, баш, биш, туш, буш, ҡуш, йәш, ошо, аша, шама, шыма, тишә, шешә, бешә, тушә, таша, төшә.

[б] өнөн тамғалау. Бб хәрефе. Бб хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: бал, убә, бил, бөтә, бәлә, бала; Булат бал ала. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): баш, бал, бил, боҫ, баз, бит, биш, бала, бәлә, булә, була, бура, бөрө, баҡа, башҡа, батша, балта, болот, болон, болан, буран, бишек, бесәй, Булат, Банат, Бикә, Борай, Баймаҡ.

Телмәр үҫтереү. «Бал».

[р] өнөн тамғалау. Рр хәрефе. Рр хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: ур, ир, өр, ара, ура, рәт, урт, тура, төрә; Турат арба тарта. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): ур, ур, өр, урә, ура, бәр, бар, бөр, бор, бур, бара, бора, бөрә, бура, урам, урәм, ураҡ, арыш, арык, арпа, арҡа, тара, төрә, тура, турә, Урал.

Телмәр үҫтереү. «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡоткарыр».

[и] өнөн тамғалау. Ии хәрефе. Ии хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: ил, иш, биш, тишә, бирә, тирмә, шишмә; Рәшит ат ашата. Эмир тутәл у тар. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): ирек, ишәк, имән, иләк, ирен, иген, итек, исем, тирәк, кишер, тишек, шишмә, Илһам, Илнур, Илузә.

Телмәр үҫтереү. «Икмәк бөтә нәмәгә баш».

[н] өнөн тамғалау. Нн хәрефе. Нн хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: ун, ин, өн, он, инә, ана, нур, төн, тин, мин; Нөгөш матур. Имән матур була. Һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): нисә, ниңә, нимә, банан, менән, Нәркәс, Нәғим, Нәбир, Нәсих.

[ң] өнөн тамғалау. ң хәрефе. ң хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: аң, уң, иң, өң, таң, тиң, туң, шаң, моң, моңло; Был буре өңө. Булмәләмоң тарала. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» укыу): моңаана, аңлы, миңае, тиңдәш, мөңрәй.

[с] өнөн тамғалау. Сс хәрефе. Сс хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: асам, сисә, сурә, сөсө, Сура, Сәлим, Солтан; Сабир ситән урә. Әсмә сәләм бирә. Сура улән сәсә. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу):сәскә, сәсәк, сукеш, саған, сабаҡ, сыбар, суҡыш, асыш, Сәғит, Сәрмән, Сәфәр.

Телмәр үҫтереү. «Сыбар тауыҡ» әкиәте.

[э] өнөн тамғалау. Ээ(е) хәрефе. Ээ(е) хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: эсә, эре, энә, элә, эшсе, эңер, тел, бел, бер, сер, белем; Эт өрә. Себеш үлән тарта. Эңер иртә төшә. һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): эҫе, эйә, эйәр, эйәк, эсәк, кеше, серек, бесәй, кесе.

[ы] өнөн тамғалау. Ыы хәрефе. Ыы хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: ысын, арыш, алыш, урын, мышы, тырыш; Сыртлан тырыш бала, һүҙҙең моделен төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): ҡыш, йыр, ышыҡ, ысыҡ, ҡыҙыл, ҡыҙыҡ, быйыл, муйыл, быйма.

Телмәр үҫтереү. «Бал ҡорттары».

[з] өнөн тамғалау. Зз хәрефе. Зз хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [з] - [с].

Телмәр үҫтереү. «Ике кәзә» әкиәте.

[й] өнөн тамғалау. Йй хәрефе. Йй хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Йә, йө, йу ҡушымсалары менән нәҙек һүҙҙәр төҙөү: йәй, йәйә, бейә, сейә, йәмле, йәшел, йөрөй, мөйөш, йутәл, йунсел. Йо, йы ҡушымсалары менән ҡалын һүҙҙәр төҙөү: йомро, йыр, йыл. Йе ҡушымсаһы һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында: тейеш, тейен, бейе, мейе, әсәйем, өләсәйем, бесәйем, инәйем.

[г] өнөн тамғалау. Гг хәрефе. Гг хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[к] өнөн тамғалау. Кк хәрефе. Кк хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [г] - [к].

[ҡ] өнөн тамғалау. Ҡҡ хәрефе. Ҡҡ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Нисәү минең бәпесем?»

[ғ] өнөн тамғалау. Ғғ хәрефе. Ғғ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [г] - [ҡ].

Телмәр үҫтереү. «Катоктағы мажара».

[ҙ] өнөн тамғалау. Ҙҙ хәрефе. Ҙҙ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

[ҫ] өнөн тамғалау. ҫ хәрефе. ҫ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [ҙ] - [ҫ].

Телмәр үҫтереү. «Ҡомһоҙ эт» әкиәте.

[h] өнөн тамғалау. hh хәрефе. hh хәрефен яҙып өйрәнеү. hүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «hаумыhығыҙ!» тип өндәшәм һәр кешегә».

[х] өнөн тамғалау. Хх хәрефе. Хх хәрефен яҙып өйрәнеү. hүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Эш һөймәгән көн итмәҫ».

[йа] өндәрен тамғалау. Һүҙҙә й һәм а хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [а] өндәре, йәғни [йа] өндәре ишетелгән ерҙә я хәрефе яҙылыуы. Яя хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. Яя хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Яҡшы hүҙ — йән аҙығы».

[йэ] өндәрен тамғалау. hүҙҙә й һәм э хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [э] өндәре, йәғни [йэ] өндәре ишетелгән ерҙә е хәрефе яҙылыуы. Ее хәрефе - ике өндө белдергән хәреф. Ее хәрефен яҙып өйрәнеү. hүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Кешенең матур сифаттары».

[йу] өндәрен тамғалау. Һүҙҙә й һәм у хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [у] өндәре, йәғни [йу] өндәре ишетелгән ерҙә ю хәрефе яҙылыуы. Юю хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. Юю хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Йылҡы малы».

[у], [ү] өндәрен тамғалау. hүҙҙең уртаhында, аҙағында у, ү хәрефтәренең яҙылыуы (тау, шау, тәү, белеү, тауыҡ, еуеш һ. б.), hүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Йәйләүҙә».

[п] өнөн тамғалау. Пп хәрефе. Пп хәрефен яҙып өйрәнеү. hүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Терпе» әкиәте.

[д] өнөн тамғалау. Дд хәрефе. Дд хәрефен яҙып өйрәнеү. hүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Тапҡыр ҡомаҡтар».

[ж] өнөн тамғалау. Жж хәрефе. Жж хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үҫтереү. «Ҡарға менән ҡыҫала».

[в], [у], [ү] өндәрен тамғалау. Вв хәрефе. Вв хәрефен яҙып өйрәнеү. [үәғәҙә], [уаҡыт] тип әйтәбеҙ, «вәғәҙә», «ваҡыт» тип яҙабыҙ. Вв хәрефе рус теленән ингән hүҙҙәрҙә: ваза, вагон,

вокзал, Волга, вышка, диван, велосипед, һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөç күсереп яҙырға өйрәтеү.

[ф] өнөн тамғалау. Фф хәрефе. Фф хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөç күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үçтереү. «Бесәй ҙә балыҡ тота».

Нәҙеклек (ь) һәм ҡалын (ъ) айырыу билдәләре. Һүҙҙә ья, ъя тамғалары. Рус теленән һәм башҡа сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә нәҙеклек билдәһе (ь): альбом, бинокль, лагерь, мебель, нефть, коньки, пальто, фасоль, фонарь, февраль, апрель, июнь, июль, сентябрь, октябрь, ноябрь, декабрь.

Телмәр үçтереү. «Буранлы ҡыш».

[ц] өнөн тамғалау. [ц] өнө һәр саҡ ҡалын әйтелешле. Цц хәрефе. Цц хәрефе сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә: цирк, цифр, цинк, циркуль, концерт, мотоцикл, һөйләмде дөрөç күсереп яҙырға өйрәтеү.

Телмәр үçтереү. «Циркта».

[щ'] өнөн тамғалау. [щ'] өнө һәр саҡ йомшаҡ әйтелешле. Щщ хәрефен яҙып өйрәнеү. Башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә щ хәрефе: щи, борщ, плащ, щётка, һөйләмде дөрөç күсереп яҙырға өйрәтеү.

[ч'] өнөн тамғалау. [ч'] өнө һәр саҡ нәҙек әйтелешле. Чч хәрефен яҙып өйрәнеү. Чч хәрефе һүҙҙәрҙә: чабан, врач, Чапаев, Учалы. Һөйләмде дөрөç күсереп яҙырға өйрәтеү.

[й'о] өндәрен тамғалау. [й'] һәм [о], йәғни [й'о] өндәре ишетелгән ерҙә ё хәрефе яҙылыуы. ёлка. Её хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. ё — рус һүҙҙәрендә тартынҡыны йомшаҡ итеп әйттереүсе тамға: [шахт'ор], [л'отч'ик], [л'ифт'ор], [лар'ок]. Её хәрефен яҙып өйрәнеү. Һөйләмде дөрөç күсереп яҙырға өйрәтеү.

Алфавит. Алфавит хәрефтәренең әйтелеше: Аа [а], Бб [бы], Вв [вы], Гг [гы], Ғғ [ғы], Дд [ды], Ҙҙ [ҙы], Ее [йе], Её [й'о], Жж [жы], Зз [зы], Ии [и], Йй [йы], Кк [кы], Ҡҡ [ҡы], Лл [лы], Мм [мы], Нн [ны], ң [ңы], Оо [о], Өө [ө], Пп [пы], Рр [ры], Сс [сы], ç [çы], Тт [ты], Уу [у], Үү [ү], Фф [фы], Хх [хы], һh [һы], Цц [це], Чч [че], Шш [шы], Щщ [ща], ъ (ҡалын айырыу билдәһе), Ыы [ы], ь (нәҙеклек билдәһе, нәҙек айырыу билдәһе), Ээ [э], Әә [ә], Юю [йу], Яя [йа].

Алфавиттың ҡулланылышы: кластағы уҡыусыларҙың фамилиялары исемлеген алфавит буйынса төҙөү, китапхана кәштәләренә китаптарҙы яҙыусыларҙың фамилияларын алфавит тәртибенә яраҡлаштырып ҡуйыу, һүҙлек һүҙҙәренең алфавит буйынса урынлаштырылыуы.

Башҡорт теле

1. Алфавит. Алфавитта хәрефтәр һаны, тәртибе. Алфавиттың тәғәйенлә-неше. Алфавитты ҡулланыу. Алфавит хәрефтәрен дөрөç яҙыу.

2. Хәреф һәм өн. Һүҙҙәге һуҙынҡы, тартынҡы өндәрҙең айырмаһын билдәләү һәм улар тураһында ҡыçҡа мәғлүмәт биреү, һөйләй белеү. Хәреф. Уның функцияһы.

а) Һуҙынҡы өндәр.

Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар таблицаһы.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| * | Ә | Ө | Y | э(е) | И |
| ** | А | О | У | Ы | — |

Бер һуҙынҡы хәреф менән генә айырылыусы һүҙҙәр төҙөү һәм әйтеп яҙыу: ай — уй, ҡар — ҡыр, бай — бәй, бил — был, тор — тор, һут — һут, ҡаш — ҡуш, мал — мәл, арыш — алыш, урам — ураҡ, көрәк — кәрәк һ. б. һүҙҙә бер генә хәрефте алмаштырыу менән мәғәнәнең үҙгәреүе.

Күсереп яҙыу.

б) Тартынҡы өндәр. Тартынҡы хәрефтәр таблицаһы.

| | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| □* □** | Б | В | Г | Ғ | ж | д | ҙ | З | й | р | л | м | н | н | - | — |
| □* □** | П | Ф | к | Ҡ | ш | т | Ç | С | | | | | | Х | Һ |

Тартынҡы өндәр нәҙек һуҙынҡылар уратылышында. Тартынҡы өндәр ҡалын һуҙынҡылар уратылышында. һүҙҙә бер генә тартынҡы хәрефте алмаштырыу менән мәғәнәнең үҙгәреүе: бар — пар, Нал — тал, йыл — ҡыл, мул — ҡул, шар — шат, таш — тап, суп — сүл, көр — көс, күсә — күбә, ҡыҙыҡ — ҡыйыҡ, тараҡ — ҡараҡ, йәмле — йәнле, Налам — ҡалам, тырыш — шырыш һ. б.

Күсереп яҙыу.

3. Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.Башҡорт теленең төп законына ярашлы һүҙҙәр йыйыу: һүҙҙенберенсе ижеге нәҙек булһа, башҡа ижектәре лә нәҙек (нәҙек һүҙ), ә беренсе ижеге ҡалын булһа, башҡа ижектәре лә ҡалын (ҡалын һүҙ). һүҙҙе дөрөç күсереп яҙыу.

4.Баш хәреф

Кешенең исем-шәрифтәре. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары.

5. о — ө, у — ү хәрефтәре менән һүҙҙәр.

о — ө, у — ү хәрефтәре менән һүҙҙәр йыйыу, уларҙы яҙып өйрәнеү. һөйләм күсереп яҙыу.

6. Һүҙҙә [э] өнөн хәрефтәр менән тамғалау.

Э хәрефенең һүҙ башында ғына яҙылыуы,[э] өнөнөң һүҙ уртаһында е хәрефе менән тамғаланыуы.

7. Йә, йө, йү, йе (һүҙ уртаһы), но, йы ҡушымсалары менән һүҙҙәр йыйыу, уларҙы яҙып өйрәнеү .

Йе ҡушымсаһы һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында: тейеш, бейек, кейек, кейем, мейес, мейе, бейе, әсәйем, өләсәйем, бесәйем.

8. һүҙҙә [й] өнөн хәрефтәр менән тамғалау: [йа] - я, [йу] - ю, [йэ] — е

9. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә я, е, ё, ю хәрефтәре.

Я, е, ё, ю — рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙы йомшартыу тамғаһы (кухня, телефон, шахтёр, тюль һ. б.).

Яя, Юю хәрефтәре ҡалын, Ее хәрефе нәҙек һүҙҙәрҙә яҙылыу,. Её хәрефе рус һүҙҙәрендә яҙыла.

10. Һүҙ төркөмдәре.Предметтың атамаһын беддергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкә-тен белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.

Ярҙамсы һүҙҙәр: һәм, менән; ла-лә, да-дә, та-тә; ғына-генә, ҡына-кенә.

Телмәр үҫтереү. Сюжетлы һүрәттәр буйынса бәләкәс хикәйәләр төҙөү. һөйләмдәр тәртибе боҙоп бирелгән текстың һөйләмдәрен тәртипкә килтереү.

5 — 6 һөйләмдән торған тексты күсереп яҙыу.

11. Һөйләм .һөйләмдең башы, аҙағы. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау, өндәү).

Һөйләмгә һүҙ өҫтәү, мәғәнәһен киңәйтеү. Һөйләмде күсереп яҙыу ҡағиҙәһен өйрәнеү.

2 класс

1. Графика. Хәреф һәм өн. Я, е, е,ю хәрефле һүҙҙәр. Һүҙҙең өн моделе менән тамғаланышы. Уларҙың хәреф менән яҙылынышы. График тамғалар: һүҙҙәр араһында ара ҡалдырыу, юлдан-юлға күсереү тамғаһы (дефис), ҡыҙыл юл (абзац)2. Морфология. Һүҙ төркөмдәре .Предмет атамалары. Кем һәм нимә һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уның мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланышы. Кешенең исем-фамилияһын, хайуандарҙың ҡушаматтарын, ер-һыу аталарын белдереүсе һүҙҙәр. Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр.Уларҙың мәғәнәһе. Ни эшләй.(бөгөн, хәҙер, ошо мәл). Ни эшләне(кисә), ни эшләр(иртәгә, киләсәктә), һорауҙарына яуап биреүсе һүҙҙәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр.Уларҙың мәғәнәләре. Ниндәй һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Ярҙамсы һүҙҙәр-һәм, менән, да, ҙа, ла, лә, ҡына-кенә, ғына-генә. Уларҙың айырым мәғәнә аңлатмауы. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙә ҡулланылышы.

3. Һүҙъяһалыш.Тамырҙаш һүҙҙәрҙе уҡыу, яҙыу( тамыр, ялғау төшөнсәһе бирелмәй).

4. Синтаксис.Һөйләм, һүҙбәйләнеш, һүҙ.Һөйләмде әйтеү маҡсаты. Һөйләмдә интонация. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өн һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр. Эйәрсән киҫәктәр.5. Орфография, интонация. Дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрен өйрәнеү. Ҙур хәреф. Һөйләм башы. Кеше исем- шәрифтәре. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары. Ике кешенең һөйләшеүен диалог формаһында яҙыу. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Һөйләмдә һаналып киткән һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре.У-ү, о-ө, э, ы хәрефле һүҙҙәр. Йә, йө, йү, йе, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Ике өндө белдергән хәрефле (я, ю, е, е) һүҙҙәр. Һүҙ башында(уы), (уэ) өндәре (в хәрефе).6. Телмәр үҫтереү. Аралашыу ситуацияһы.Уға ярашлы һөйләшеү ҡороу.Текст.Тексты таныу.Текстың исеме, уның һөйләмдәренең мәғәнәүи бәйләнеше.Текст абзацтары һәм уның мәғәнәүи эҙмә-эҙлелеге. Текст төҙөү. Диалог.Монолог( үҙ аллы һөйләнеү).сығыш яһау, иғлан эшләү,доклад). Аралашыу этикеты(сәләм биреү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт белдереү, үтенес менән өндәшеү).7. Универсаль эш төрҙәрен өйрәнеү.Үҙ аллы белем алыу оҫталығына өйрәнеү.Уҡыу эшмәкәрлеге(маҡсатты күҙаллау, уҡыу материалына ҡыҙыҡһыныу, эште планлаштырыу, уҡыу мәсьәләһе , эҙләнеү эше, рефлексия, контроль). Уҡыу диалогы. Аралашыу мәҙәниәте.

3 класс

1. Фонетика һәм орфоэпия. Өндәр һәм хәрефтәр. Өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың сиратлашыуы {китап – ки табы, ҡалаҡ-ҡалағы). Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Һүҙҙәргә фонетик анализ.

2. Һүҙ составы.Һүҙ составы (тамыр һәм ялғауҙар). Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың тамыры. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. һүҙьяһалыш. Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушылып яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр. Ҡабатлау юлы менән йәки парлап яһалған ҡушма һүҙҙәр. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын (ъ) һәм нәҙек (ь) айырыу билдәләренең яҙылышы. Һүҙҙәргә составы буйынса анализ. Һүҙ төҙөлөшө. Һүҙҙең тамыры. Тамыр нигеҙле һүҙҙәр. Һүҙ нигеҙе тураһында төшөнсә. Яһалма һәм ҡушма һүҙҙәр. Ялғауҙар.

3. Орфография һәм пунктуация. Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ялғау ҡушылғанда бер иш тартынҡыларҙың килеп сығышы. Тамыр һүҙҙәрҙәге о-ө, ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыуы. О-ө, ы-е хәрефтәренең тамыр һүҙҙәрҙә яҙылмау осраҡтары (тупраҡ, япрағы). Нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы. Грамоталы күсереп яҙыу. Диктант, өйрәтмә изложение, мини инша.

4. Морфология. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.

Предмет атамаһы. Уны һөйләмдә ҡулланыу. Исемдең һорауҙары. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Кешенең исем-фамилияһының, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының, китап һәм газета-журнал исемдәренең ҙур хәреф менән яҙылышы.Билдәне белдергән һүҙҙәр. Уларҙың исем алдынан килеүе, телмәрҙәге әһәмиәте.Хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәр. Һөйләмдә уларҙы таныу, дөрөҫ һорау ҡуйыу. Был һүҙҙәрҙең һөйләмдә хәбәр ролен үтәүе.

Ярҙамсы һүҙҙәр. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

5. Синтаксис. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе таныу, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмде өс төргә бүлеү: хәбәр, һорау һәм өндәү. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Һөйләмгә синтаксик анализ.

6. Лексика. Һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Синонимдар, антонимдар, омонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, улар менән һөйләмдәр төҙөү.

7. Телмәр һәм уның төрҙәре. Һөйләү телмәре. Диалог. Әңгәмәсе менән диалог ҡороу. Аралашыу оҫталығын шымартыу. Монолог. Уны һөйләү оҫталығы (логик эҙмә-эҙлелек һәм тасуирилыҡ). Эске телмәр.

Хикәйә. Әкиәт. Шиғыр. Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү.

Уларға исем ҡушыу (план). Абзац. Ҡыҙыл юл. Бәләкәй күләмле хикәйәләр (текст) ижад итеү. Текстҡа ҡарата ҡыҫҡа баһалама яҙыу. Әкиәт. Әкиәт ижад итеү. Шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү. Шиғырҙы күсереп яҙыу үҙенсәлектәре.

Телмәр үҫтереү. Телмәр мәҙәниәте. Темаға ярашлы тәбиғәт күренештәре, тормош-көнкүреш, ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында ҡыҫҡа текст төҙөү. Бирелгән нигеҙ һүҙҙәр ярҙамында текст төҙөү.

Текстҡа план төҙөү. Тексттың өлөштәре һәм һөйләмдәр араһында мәғәнәүи бәйләнеш булдырыу. Тексттың темаһы, төҙөлөшө (инеш, төп өлөш,йомғаҡлау).Әҙер йәки коллектив төҙөлгән план буйынса текст төҙөү. Тәҡдим ителгәнтекст буйынса изложение (50-60 һүҙ) яҙыу. Хикәйә һәм инша яҙыу (65-70 һүҙ). Әкиәт төҙөү.

**4 класс**

1. Фонетика һәм орфоэпия**.** Ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар, парлы һәм парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, өн һәм хәреф тураһындағы белемдәрен системаға һалыу. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең үҙенсәлекле әйтелеше (орфоэпия). Һүҙгә тулы фонетик анализ.

2. Һүҙ составы (морфемика**).** Һүҙ составы ( тамыр, ялғау). Тамырҙаш һүҙҙәр. Яһаусы (суффикс), үҙгәртеүсе ялғауҙар. Тамырға ялғау ҡушыу юлы менән һүҙ яһау(һүҙьяһалыш). Һүҙ составына анализ.

3. Орфография һәм пунктуация**.** Башҡорт теле орфограммаларын системаға һалыу. Тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйып, хатаһыҙ күсереп яҙырға, диктант, изложение, инша һәм башҡа тикшереү эштәрен үтәй алырға бурыслы.

4. Синтаксис. Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм. Уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәргә айырыу. Һөйләмдәрҙең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Һөйләмгә синтаксис анализ.

5. Морфология**.** Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.Исем. Исемдең предметты атау функцияһы. Исемдең һорауҙары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан менән үҙгәреше. Исемдең эйәлек заты һәм килеш менән үҙгәреше. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Исемгә морфологик анализ.Алмаш. Уның төркөмсәләре. Зат алмаштары. Килеш менән үҙгәреүе. Һорау һәм күрһәтеү алмаштары. Алмашҡа морфологик анализ.Сифат. Тамыр һәм яһалма сифаттар. Сифаттың үҙгәреүе. Сифат дәрәжәләре. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифатҡа морфологик анализ.Ҡылым. Ҡылымдың яһалышы. Тамыр, яһалма, ҡушма ҡылымдар. Ҡылымдың үҙгәреше (заман, зат, һан, барлыҡ-юҡлыҡ). Үткән заман ҡылымдары. Уларҙың зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ, шаһитлы-шаһитһыҙ формалыра. Хәҙерге заман ҡылымдары. Уларҙың зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалыры. Киләсәк заман ҡылымдарының төрҙәре(эш-хәрәкәттең үтәлеүенә икеләнеү, мотлаҡ ышандырыу). Ҡылым һөйкәлештәре. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары. Уларҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Шарт һөйкәлеше, теләк һөйкәлеше ҡылымдары. Ҡылымға морфологик анализ.Һан**.** Ябай һәм ҡушма һандар. Һүҙ төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һандарҙың башҡа һүҙҙәр менән оҡшашлығы. Һанға морфологик анализ.

6. Лексика**.** Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Һүҙҙең күп мәғәнәлеге. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Омонимдар. Синонимдар. Антонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланыу.

Телмәр үҫтереү. Бәйләнешле телмәр. Текст. Уның мәғәнәүи өлөштәре. Абзац. Ҡыҙыл юл. Идея-тематик йөкмәтке. Текст йөкмәткеһенең планын төҙөү. Тексты һөйләү. Инша, изложение. Телмәр этикеты.

## Уҡытыу-методик һәм мәғлүмәт-ресурс яҡтан тәьмин итеү

### Уҡытыу-методик ҡулланмалар

1. Аллабердина М. Р. Методические указания к учебнику «Әҙәби уҡыу» («Литературное чтение») 3 для классаобщеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Учебник – Уфа: Издательство ГУП РБ БИ «Китап» имени Зайнаб Биишевой, 2017. – 155 с.

2. Иксанова Р. М., Казыханова З. И. Методические указания к учебнику «Әҙәби уҡыу» («Литературное чтение») для 1 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Учебник – Уфа: Издательство ГУП РБ БИ «Китап» имени Зайнаб Биишевой, 2017. – 137 с.

3. Казыханова З. И. Методические указания к учебнику «Әҙәби уҡыу» («Литературное чтение») для 2 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Учебник – Уфа: Издательство ГУП РБ БИ «Китап» имени Зайнаб Биишевой, 2017. – 186 с.

4. Мавлиярова А. Т. Зайниева Р. А. Методические указания к учебнику «Әҙәби уҡыу» («Литературное чтение») для 3 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. Методические указания к учебнику «Әҙәби уҡыу» («Литературное чтение») для 3 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения– Уфа: Издательство ГУП РБ БИ «Китап» имени Зайнаб Биишевой, 2017. – 186 с.

### Мәғлүмәт ресурстары

1. Башкирское издательство «Китап» им. З. Биишевой // URL: http://www.kitap-ufa.ru/information/elektronnye-uchebnye-posobiya.php (дата обращения: 3.07.2022).

2. Башҡортса википедия. Ирекле энциклопедия // URL: https://ba.wikipedia.org/wiki/%D0%91%D0%B0%D1%88_%D0%B1%D0%B8%D1%82 (дата обращения: 3.11.2021).

3. Башкорт теле // URL: http://tel.bashqort.com (дата обращения: 3.11.2021).

4. Отдел башкирской литературы и краеведения // URL: http://www.bashnl.ru/en/o-biblioteke/struktura-biblioteki/otdel-bashkirskoy-literatury/ (дата обращения: 03.07.2022).

5. Сайт изучения башкирского языка // URL: http://tel.bashqort.com (дата обращения: 03.07.2022).

6. Сайт национальной библиотеки им. Валиди // URL: http://www.bashnl.ru (дата обращения: 03.07.2022).

7. Электронные учебники // URL: http://in-yaz-book.ru/bashkir.shtml (дата обращения: 03.07.2022).